МУНИЦИПАЛЬНОЕ БЮДЖЕТНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА ИМЕНИ ЯКУПА КУЛМЫЯ ДЕРЕВНИ КАНАКАЕВО МУНИЦИПАЛЬНОГО РАЙОНА ИШИМБАЙСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

| Рассмотрено на заседании ШМО учителей начальных классов | Согласовано | Утверждено |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО: ________ | Заместитель директора по УВР: ________ | Директор МБОУ СОШ им. Я.Кулмыя д.Канакаево |
| Фахретдинова З.Ш. | Фахретдинов И.Х. | |
| Протокол №1 от «30» августа 2023 г | «30» августа 2023 г | Акбулатова З.М. |
| | | Приказ № от 31.08.2023 г |

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
ПО ЛИТЕРАТУРНОМУ ЧТЕНИЮ НА РОДНОМ ЯЗЫКЕ
НАЧАЛЬНОГО ОБЩЕГО ОБРАЗОВАНИЯ

Составлена на основе авторской учебной программы
Ф.Ш.Сынбулатовой, А.Т.Мавлияровой

Составила учитель начальных классов : Ишмуратова Л.Ф.
2023 год

Уҡытыу башҡорт телендә ойошторолған мәктәптәргә тәҡдим ителгән был уҡыу программаһы Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары талаптарына,милли мәктәптәр өсөн эшкәртелгән уҡыу планына таянып ҡоролдо.

Рәсәй Федерацияһының “Мәғариф тураһындағы”, Башҡортостан Республикаһының “Башҡортостан халҡының телдәре тураһында” ғы законадарына нигеҙләнеп, шулай уҡ башҡорт теленең хөкүмәт статусына эйә булыуына таянып, бала үҙенең туған телен республика эсендә аралашыу теле итеп тойорға һәм иркле һөйләшеү мөмкинлектәренә эйә булырға тейеш. Башланғыс мәктәптә әҙәби тел һәм ябай һәйләшеү-аралашыу күнекмәләренә башланғыс һалыу тигән һүҙ.

Бала үҙ телендә һөйләшә, фекер йөрөтә, уның аша кешеләр араһындағы мөнәсәбәттең иң ҡатмарлы донъяһына үтеп инә, тәбиғәт, йәмғиәт һәм сәйәси күренештәрҙе танып белә, улар хаҡында тәүге төшөнсәләрҙе үҙләштерә. Туған тел балаға туранан-тура йоғонто яһай: туған телдә әйтелгән һүҙ уны шатландыра, һәм төрлө бәхәстәргә тарта ала. Туған телде өйрәтеү уҡыусының үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләтен, һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереүҙе, байытыуҙы, камиллаштырыуҙы, баланың үҙен шәхес итеп үҫтереүҙе, формалаштырыуҙы күҙаллай.

Мәктәптә туған тел махсус предмет булараҡ өйрәнелә. Ә башланғыс мәктәптә иһә айырыуса әһәмиәтле урын алып тора. Сөнки башланғыс класс уҡыусылары туған тел аша ысынбарлыҡты танып белә, кешеләр араһындағы, йәмғиәттәге мөнәсәбәттәрҙе, үҙен уратып алған донъяны өйрәнә, шәхес булараҡ. Фәҡәт үҙ телең генә көйөндөрә ата-бабаларыңдың үткәнен белергә, киләсәккә өмөт- хыялдарын яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә. Ошоларға ирешмәйенсә тороп, телеңдең, милләтеңдең киләсәген күҙаллауы мөмкин түгелдер. Шуға ла туған телде бөтә нескәлектәре менән өйрәнеү,уны белеү мотлаҡ.

Башланғыс мәктәптә туған телде уҡытыу юғары кластарҙа өйрәнеләсәк тел һәм әҙәбиәт дәрестәренә әҙерлек этабы булып тора. Әгәр уҡыусы туған тел дәрестәрендә башланғыс класта уҡ яҡшы һөҙөмтәләргә ирешһә, уға өлкән кластарҙа башҡа предметтарҙы уңышлы үҙләштереү өсөн ҙур мөмкинселектәр тыуа. Шуға ла башланғыс мәктәптә туған тел дәрестәре алдында ҡуйылған мөһим шарттар-уҡыусыларҙы тормош менән таныштырып, унда үҙ урынын табырға өйрәтеү; мәктәптә уҡытылған туғандаш әҙәбиәттәр менән сағыштырып, башҡа фәндәр, сәнғәт төрҙәренә бәйләп алып барыу; һәр көн һайын арта барған фәнни мәғлүмәтте еткереү; әҙәбиәт һәм сәнғәттең етеҙ үҫеше аша уҡыусыларҙың танып белеү һәләтлектәрен үҫтереү; уларҙың үҙ аллы белем алыуына, әҙәби китап уҡыуына, уҡылғанды баһалай белеүенә булышлыҡ итеү

һәм ижади эшмәкәрлектәрен әүҙемләштереү бурысы тора. Шулай уҡ йәмғиәт алдында яуаплылыҡ тойған һәм рухи яҡтан ныҡлы булған интелектуаль шәхес тәрбиәләү бурысы ла мөһим.

Юғарыла аталған бурыстарҙы хәл итеү өсөн тейешле шарттар булдырыу зарур. Иң төп шарттарҙың береһе – телде өйрәнеү өсөн мөмкинселектәр тыуҙырыу. Шуға күрә балаларҙы тел ғилеменә өйрәтеү башланғыс кластан маҡсатлы рәүештә алып барыла. Дәүләт теле булған рус һәм халыҡ-ара аралашыу теле булған инглиз телдәрен өйрәнеү, ҡағиҙә буларак, туған телгә нигеҙләнеп атҡарыла.

## Әҙәби уҡыу дәрестәренең дөйөм тәғәйенләнеше

“Әҙәби уҡыу” дәреслегенең төп тәғәйенләнеше- баланы 1-се кластан дөрөҫ,аңлы,шыма һәм тасуири уҡыуға өйрәтеү. Киләһе кластарҙа был күнекмәләр камиллаштырыла. 1-се кластан уҡ уҡытыусы уҡыусыны дәреслек менән эш итә белергә,ундағы әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә китап уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәтеү, ә бала алдында артабан үҙ йәшенә ярашлы булған әҫәрҙәрҙе уҡытыусы йәки атай -әсәй ярҙамында һайлап алып,үҙ аллы уҡырға өйрәнеү бурысы тора. **Әҙәби уҡыу дәрестәренең төп маҡсаты -** китап уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу,уҡыу техникаһын камиллаштырыу балаларҙы китап уҡыуға ылыҡтырыу, һөйләү һәм аралашыу телмәрен, оҫталығын үҫтереү,үҙ аллы ижад итеүгә мөмкинлектәр,шарттар булдырыу.Уҡыу процесында бала тирә-яҡ донъяны танып белә,өйрәнә,уның тураһында мәғлүмәт ала.Шулай уҡ уҡыусы әҫәр геройҙарының ҡылыҡ-фиғелдәрен баһаларға,улар өлгөһөндә яҡшыны насарҙан,изгелекте яуызлыҡтан, ярҙамды хаслыҡтан,мөхәббәтте нәфрәттән айырырға,кеше психологияһын тойомларға,төрлө ыңғай әҙәби сюжет ситуациялары өлгөһөндә үҙ-ара мөнәсәбәт ҡороу оҫталығына өйрәнә.Уҡыу аша кеше белемле ,хис-тойғоға бай, тәрбиәле, ныҡлы рухлы шәхес булып формалаша.

Әҙәби уҡыу дәресендә баланы тексты тасуири уҡырға,ҡыҙыҡһынып,мауығып тыңларға күнектереү бурысы тора.Үҙе теләп уҡырға күнеккән бала был шөғөлдән ҡәнәғәтлек тойғоһо ғына кисерә.Уның һүҙ байлығы арта,аралашыу оҫталығы,телмәре шымара. Былдай бала нәфис һүҙҙе ишетергә, аңларға өйрәнә,һүҙҙең кешегә төрлөсә тәьҫир итеү көсөнә эйә булыуына төшөнә. Һүҙ-ул көслө ҡорал. Ул кешене һөйөндөрә, илата, көйөндөрә, көлдөрә, уйландыра, асыуландыра. Уның менән кеше күңелен яралап та,яҡшыға көйләп тә була. Аралашҡанда баланы этикет һаҡларға,кешегә иғтибарлы һәм кешелекле булырға күнектереү-әҙәби уҡыу дәрестәренә ҡуйылған талаптарҙың береһе. Шуға күрә һүҙҙең мәғәнәһе өҫтәндә махсус эш ойоштороу зарур.

Уҡыу баланы үҙен уратып алған мөхитте,тирә-йүндәге күренештәрҙе өйрәнергә,кеше психологияһына төшөнөргә, йәғни тирә-яҡ донъяны танып белергә булышлыҡ итә. Белемгә тәүге аҙымдар уҡыу дәресенән башлана. Уҡыу мәғлүмәтле булырға һәм бүтән предметтарҙы өйрәнеүгә нигеҙ һала. Ул-математика,рус теле һәм әҙәбиәте,тирә-яғыбыҙҙағы донъя һәм уҡыу планында күрһәтелгән башҡа предметтарҙы өйрәнеүгә булышлыҡ иткән төп ҡорал. Шыма,аңлы уҡыуға өйрәнгән уҡыусы артабан уҡыуын уңышлы тамам итә. Уҡыу планында ҡаралған предметтарҙың материалы кластан-класҡа күскән һайын ҡатмарлаша бара.Ә был баланың үҙ аллы мәғлүмәт алыу ихтыяжын көсәйтә.Уҡырға өйрәнгән,китаптан үҙенә кәрәкле мәғлүммәтте таба белгән һәм уны яҙма рәүештә йәки һөйләү телмәрендә тейешле йүнәлештә ҡулланырға күнеккән уҡыусы мәктәптә өйрәнелгән предметтарҙы тейешле кимәлдә үҙләштерә.Шуға күрә уҡыу дәрестәрендә етеҙ һәм аңлы уҡырға өйрәтеү-башланғыс класс уҡытыусыһы алдында ҡуйылған төп талаптарҙың береһе. Уҡыу,беренсенән, тирә-яҡ донъяны танып белеү, сараһы булһа,икенсенән,ул кешенең күңел,рухи донъяһын байыҡтырған, уның күңел торошон көйләгән һәм күңел ептәрен әҙәби геройҙар, әҙәби мөхит менән бәйләп,эмоциональ аралашыу ихтыяжын тәьмин иткән кеше күңелен"дауалаусы" сара булып тора. Бала әҫәрҙе хәл-ваҡиғаларҙы йөрәге,хис-тойғолары аша үткәреп,әҙәби геройҙар менән бергә ваҡиғалар сорналышында ҡатнашып уҡырға тейеш. Әҙәби уҡыу дәрестәрендә тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙе мәғлүмәт алыу,тирә-яҡ донъяны танып белеү, мәҙәни тәрбиә алыу сығанағы итеп кенә түгел,ә фекерләү,аралашыу,бәхәсләшеү, үҙ-ара мөнәсәбәт ҡороу материалы итеп тә ҡулланырға кәрәк.

**Телмәр эшмәкәрлеген** формалаштырыуҙа төп мәсьәләләрҙең береһе -баланы дөрөҫ, етеҙ, аңлы һәм тасуири уҡырға өйрәтеү.

«Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре» бүлеге түбәндәге процестарҙы үҙ эсенә ала:

Тыңлау-телдән әйтелгән информацияны тыңлау һәм мәғәнәһенә төшөнә барыу бер үк ваҡыт эсендә башҡарыла: уҡыусы һөйләгәнде тыңлай, һөйләүсенең фекеренә төшөнә, телмәре аша уның мөнәсәбәтен, мәғәнә биҙәктәрен билдәләй, йөкмәткеһенә ҡарап, үҙ яуабын әҙерләй, ҡылығын, тәртибен планлаштыра.

**Уҡыу** - уҡылған текстан үҙенә кәрәкле мәғлүмәт, белем алыу, текстың йөкмәткеһен тәрән аңлау, уға үҙ ҡарашыңды булдырыу. Төрлө күләмдәге, жанрҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙе үҙ аллы аңлап уҡыу; уҡыу маҡсатын, уҡыу төрҙәрен билдәләү; тасуири уҡыу сараларын ҡулланып төрлө маҡсатты күҙ уңында тотҡан әҙәби текстарҙы дөрөҫ, аңлап уҡыу. **Аңлы уҡыу** дөрөҫ һәм етеҙ уҡыу менән үрелеп бара. Уға өлгәшеү өсөн текст өҫтөндә эшләүҙең төрлө алымдары ҡулланыла: әҙәби әҫәрҙең телмәр

үҙсәнлектәрен тикшереү,йәғни теге йәки был һүҙ,һүҙбәйләнеш мәғәнәһен асыҡлау өҫтөндә эш ойоштороу; һүрәтләү сараларын билдәләү;текстың йөкмәткеһен сағылдырған асҡыс һүҙҙәрҙән уның сюжетын төҙҙөрөү һәм башҡа эштәр ҡабат-ҡабат уҡыу һөҙөмтәһендә ғәмәлгә ашырыла. Бындай эштәр баланың етеҙ уҡыуын үҫтереү менән бер рәттән аңлы уҡырға өйрәнеүгә лә булышлыҡ итә.

**Һөйләү**. Һөйләү телмәре ни тиклем үҫешкәнерәк, камилыраҡ булһа, кеше үҙ фекерен әңгәмәсеһенә шул тиклем еңелерәк еткерә һәм башҡаларҙы ла тиҙерәк аңлай. Уҡылған текстар ярҙамында диалог ҡорорға, һөйләү этикетын ҡулланып монолог төҙөргә, тормоштан алған тәьҫораттарыңды белдерергә, әҫәрҙә яҙыусының телмәр үҙенсәлеген билдәләргә һәм уның фекерен асыҡларға, текстың төп фекерен табырға тырышыу ҙа һөйләү телмәренең үҫеүенә булышлыҡ итә.

Әҙәби уҡыу дәреслеге шул уҡ ваҡытта үҙең ишеткән, күргән, уҡыған, кисергән хәл-ваҡиғаларҙы, дөйөм алғанда, фекерҙәреңде билдәле маҡсатта тулы, дөрөҫ, эҙмә-эҙ һәм бәйләнешле итеп яҙа белеүгә лә өйрәтә.

Яҙыу телмәрен үҫтереү уҡыусыларҙа түбәндәге күнекмәләрҙе үҫтереүҙе күҙ уңында тота:

-билдәле бер маҡсатты күҙ уңында тотоп, төрлө жанрҙарҙа (хикәйәләү, һүрәтләү, хөкөм йөрөтөү) яҙа белеү;

-йөкмәткене өҫтәлмә материал менән байытып яҙыу;

-үҙеңдең хикәйәңде булдырыу (мәҫәлән, картина буйынса);

-әҙәби һәм ирекле темаларға инша яҙыу;

-баһалама, характеристика яҙыу.

«Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре» бүлеге тыңлау, һөйләү, яҙыу һәм уҡыу процестарының үҫешен тәьмин итеп, мәҙәниәтле аралашыу күнекмәләрен барлыҡҡа килтерә. Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре үҙ- ара тығыҙ бәйләнештә булып, бер-береһенә туранан-тура йоғонто яһай. Шунлыҡтан тыңлау, һөйләү, яҙыу һәм һәләтлектәрен комплекслы үҫтерергә кәрәк.

«Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре» бүлеге төрлө кимәлдәге **текст өҫтөндә эшләү** күнекмәләрен барлыҡҡа килтереүҙе лә үҙ эсенә ала. Был эш түбәндәге анализлау оҫталыҡтарын барлыҡҡа килтереүҙе күҙаллай:

-әҙәби әҫәрҙәрҙең, фәнни-популяр мәҡәләләрҙең һүрәтләү-тасуирлау сараларын, йөкмәткеһен, маҡсатын, тәғәйенләнешенә ярашлы һайлау дөрөҫ ҡулланыу;

- автор тарафынан тәҡдим ителгән тормош үҙенсәлеген күрә башлау;

- әҙәби, фәнни-популяр текстар араһында сәбәп-һөҙөмтә бәйләнешен булдырыу, айырмалығын күрә белеү;

- автор позицияһын, ҡарашын, үҙсәнлеген аңлау; текстың төп фекерен айыра белеү. Текст өҫтөндә эш **өс баҫкыстан** тора -эште тексты уҡығанға тиклем ойоштороу,

-эште тексты уҡыу процесында ойоштороу,

-эште тексты уҡығандан һуң ойоштороу.

**1 баҫкыс**. **Әҙерлек эше**. Текст өҫтөндә эш тойомлау,күҙ алдына килтереү,фаразлау кеүек психик процестар нигеҙендә ойоштторола. Тәүҙә тексты"күҙҙән үткәреү",йәғни уның күләмен,биттәр һанын байҡау,жанр төрөн билдәләү,авторҙың исем-шәрифтәре менән танышыу. Артабан текстың исеменә нигеҙләнеп,уның йөкмәткеһен күҙаллатыу,фаразлау.

**2 баҫкыс.Әҫәрҙе уҡыу процесында текст өҫтөндә эш.**

Икенсе баҫкыстың маҡсаты-текстың йөкмәткеһен аңлау,төшөнөү.Тексты уҡыу.Һүҙлек эше: а) әҙәби әҫәрҙе уҡыу процесында аңлашылмаған һүҙҙәрҙе бер юлы аңлатып барыу рөхсәт ителә;

б) уҡыусы аңлашылмаған һүҙҙәрҙе ҡәләм менән билдәләп бара ла,тексты уҡып бөткәс,уҡытыусынан уларҙың мәғәнәһен һорай;

в)һүҙлек һүҙҙәр таҡтаға яҙыла һәм әҫәрҙе уҡыр алдынан йәки уҡығас,шул һүҙҙәр менән эш ойошторола.

**3 баҫкыс**.Әҙәби әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен билдәләү,уның буйынса фекер алышыу.

1. Әҫәргә ҡарата проблемалы һорау ҡуйыу.Автор тарафынан әҙәби жанрға һалынған төп мәғәнәүи фекерҙе,фәлсәфәүи йөкмәткене билдәләү.Быға яуап эҙләү,һөйләшеү ҡороу.
2. Әҫәрҙең исеменә ,уға ҡарата бирелгән һүрәттәргә ҡабаттан иғтибар иттереү: автор ни өсөн әҫәрҙе шулай атаған?
3. Ижади эштәр ойоштороу.

"**Китап уҡыу даирәһе**"бүлегендә балалар өсөн тәғәйенләнгән материалдарҙан йөкмәткеһен һайлау

мөмкинлеге принциптары билдәләнә. Бирелгән принциптар уҡыусыларҙа үҙе уҡырға теләгән әҫәрҙе һайлау, ғөмүмән, китапты ихлас һәм даими уҡырға ғәҙәтләндереү, үҙ аллы уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү, балаларҙа әҙәбиәт донъяһына, тексты уҡырға һөйөү тәрбиәләү; төрлө китаптарҙан үҙ эсенә әхләки-эстетик ҡиммәттәрҙе алған текстарҙы һайлай алыу күнекмәләрен булдырыу ҡаралған.

«**Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсә биреү**» бүлеге уҡыусыларҙы тәү башлап әҙәбиәт ғилеме менән таныштыра. Был инде әҙәби төр һәм жанр

үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу, уларҙы таный, айыра белеүҙе; телдең һүрәтләү, тасуирлау сараларын аңлы ҡабул итеүҙе үҙаллай.

**«Уҡыусыларҙың ижади эшмәкәрлеген үҫтереү»** бүлеге әҙәби белем биреү йөкмәткеһенең төп йүнәлеше булып тора. Ижади эшмәкәрлек тәжрибәһе уҡыусының уҡыу һәм яҙмә телмәренә үтеп инә, ә был, үҙ сиратында, уҡыусыларға алған белемдәрен файҙаланып, үҙ аллы ижад итергә мөмкинлек тыуҙыра. Артабан был бүлектә төрлө формалы текстар барлыҡҡа килтереүгә, уҡылған әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә төрлө һүрәтләү саралары, һөйләү формалары ҡулланып, үҙеңдең әҫәрҙәреңде ижад итеүгә лә иғтибар бирелә.

**«Әҙәби уҡыу» дәреслеге йөкмәткеһендә тәрбиәүи йүнәлеш ҡиммәттәре**

Башланғыс мәктәптә уҡыу предметы буларак әҙәби уҡыу дәрестәре белем биреүгә генә түгел, ә тәрбиәүи ҡиммәттәргә лә ҙур әһәмиәт бирә. Уҡыу дәрестәрендә уҡыусылар тәбиғәтте күҙәтеү, уны һаҡлау һәм шулай уҡ әҙәп, әхлаҡ, мәҙәниәтле аралашыу мәсьәләләренә бағышланған әҫәрҙәр менән танышалар. Төрлө әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыу, ҡабул итеү барышында башланғыс мәктәп уҡыусыларында белм алыу менән бергә туған тәбиғәтҡә һөйөү, һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләнә. Кешеләрҙең уй-фекерҙәрен, ҡылыҡтарын аңлау һәм шунан сығып үҙерендә лә ыңғай сифаттарҙы үҫтереү хуплана.

Әҙәби уҡыу дәрестәре, сәнғәт менән таныштырыуҙың, уға һөйөү тәрбиәләүҙең бер төрө буларак, уҡыусыларҙы үҙ халҡының һәм милләтенең эстетик-әхлаҡи ҡиммәттәре менән таныштырыуҙы һәм ҡайһыһында юғары әхләҡи һыҙаттарҙы: матурлыҡты күрә, баһалай һәм ҡабул итә алырҙай тойғолар тәрбиәләүҙе; кешелектең һәм үҙ милләтенең тәрбиәһенә тура килерҙәй ыңғай сифаттарҙы формалаштырыуҙы күҙаллай.

Әҙәби уҡыу дәрестәрендә уҡыу техниҡаһы, уҡыу күнекмәләрен булдырыу дауам итә. Әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡығандан һуң анализлап, уҡыусы яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, дөрөҫлөк, ғәҙеллек, тоғролоҡ, дуҫлыҡ тураһында уйлана. Шулай уҡ туған тел дәрестәрендә әҙәби әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы, образдарҙы ысын күңелдән ҡабул итеү, шуның менән уҡыусылар күңеленә эмоциональ-эстетик йоғонто яһау мөһим роль уйнай.

Әҙәби белем биреү сиктәрендә тормошҡа ашырылған рухи-әхлаҡи тәрбиә һәм белем биреү уҡыусыла Туған илгә, кешеләргә ҡарата булған ыңғай шәхси сифаттарҙы барлыҡҡа килтерә, формалаштыра.

**«Әҙәби уҡыу» дәреслегенең уҡыу планындағы сәғәттәр бирелеше**

Базис уҡыу пландарына ярашлы, Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү мәктәптәрендә «Әҙәби уҡыу » дәреслеген өйрәнеүгә башланғыс кластарҙа бөтәһе 234 сәғәт бүленә.

1-се класта яҙыу һәм уҡыу дәрестәре бергә алып барылып, «Әлифба» дәреслеге аша тормошҡа ашырыла. «Грамотаға өйрәтеү һәм телмәр үҫтереү» бүлегенең дауамлылығы 18 уҡыу аҙнаһын тәшкил итә. Аҙнаһына 5 сәғәт - әҙәби уҡыу(2сәғәт иҫәбенән) һәм әсә теле(3 сәғәт иҫәбенән) дәрестәре бергә алып барыла. «Грамотаға өйрәтеү һәм телмәр үҫтереү» бүлеген өйрәнеү ваҡыты һәр мәктәптә уҡыусыларҙың мөмкинселектәренән, уҡытыу тиҙлегенән, уҡыу сараларын эффектлы файҙаланыуҙан тора. Был бүлекте үҙләштергәндән һуң әҙәби уҡыу менән әсә теле дәрестәре айырым өйрәнелә. Уҡыусы әлифбаға тиклемге һәм әлифба осоронда “тере” һүҙҙе тыңларға,ишетергә һәм хәрефтәрҙе фишкалар менән тамғалап,һүҙҙең өн моделен график рәүештә төҙөргә өйрәнә. Артабан был график модель нигеҙендә һүҙҙе хәрефтәр менән алмаштырып, уҡыу күнекмәһенә эйә булғас,уҡыу йылының икенсе яртыһында”Әлифба”ны тамамлап,”Әҙәби уҡыу” дәреслеген уҡыуға күсә. Уның материалы нигеҙендә етеҙ һәм аңлы уҡырға өйрәнеү өҫтөндә маҡсатлы эш башлана.

Дөйөм алғанда”Әҙәби уҡыу”дәрестәрен үткәреүгә башланғыс кластарҙа бөтәһе 234 сәғәт бүленә.

| 1 класс | 2 класс | 3 класс | 4 класс |
|---|---|---|---|
| Аҙнаһына-2сәғәт( 33 аҙна) Бөтәһе йылына-66 сәғәт | Аҙнаһына-2сәғәт(34аҙна) Бөтәһе йылына-68сәғәт. | Аҙнаһына-2сәғәт(34аҙна) Бөтәһе йылына-68сәғәт. | Аҙнаһына-2сәғәт(34аҙна) Бөтәһе йылына-68сәғәт. |

**Башланғыс класс уҡытыусыһы үҙ алдына баланы өс кимәлдә үҫтереү бурысын аныҡ ҡуя.**

**Шәхси үҫеш кимәле**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.

Был йүнәлештә башланғыс мәктәп уҡыусыһына уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш өсөн кәрәклеген аңлатырға, китап уҡырға ғәҙәтләнеү, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырырға; үҙ-үҙенде һәмтормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул итергә тарихи-мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белергә өйрәтергә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү үҙ фекереңде булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап бирә.

**Метапредмет кимәле**

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

Предмет-ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора

-әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәҡәләләрҙән, белемде арттырырҙай материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;

-әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау ( тексты өлөштәргә бүлеү, план төҙөү, тасуирлау сараларын таба белеү һәм текстың төп фекерен асыҡлау;

-үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;

- тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;

-йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;

-аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;

- төркөмдәрҙә эшләүҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү;

**Предмет кимәле**

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Предметты өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре түбәндәгеләр:

-компетентлы уҡыуҙы формалаштырыу;

-уҡыу техникаһын үҙләштереү;

-уҡылған йәки тыңланған әҙәби әҫәрҙәре аңлау алымдарына эйә булыу;

-интерпретацияның төп элементтарын үҙләштереү;

-әҙәби әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр уҡыу текстарын анализлау һәм үҙгәртеү күнекмәләренә эйә булыу;

-үҙеңде ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайлай алыу;

-һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итә белеү;
-үҙенде ижади эшмәкәрлеккә һәләтле, белемле китап уҡыусы итеп тойоу;
-монологтар төҙөү, текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү;
-һүрәтләү, хикәйәләү, хөкөмләү элементтарын индереп, бәләкәй текстар төҙөү;
- шиғырҙарҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

**Предмет буйынса башланғыс дөйөм белем биреүҙең йөкмәткеһе**

*Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлегенең төрҙәре.*

**Тыңлау, тыңлау һәм аңлау.**

Телдән һөйләнгән телмәрҙе тыңлау һәм ҡабул итеү. Мәғлүмәтте тыңлау һәм мәғәнәһенә төшөнә барыу: уҡыусы һөйләмде тыңлай, һөйләүсенең фекер ебенә төшөнә, телмәр аша унын мөнәсәбәтен, мәғәнә биҙәктәрен билдәләй, йөкмәткеһенә ҡарап үҙ яуабын билдәләй, ҡылығын, тәртибен планлаштыра; уҡыған фәнни-мәғлүмәти, әҙәби әҫәрҙәр буйынса һорау биреү һәм мәғлүмәт алыу күнекмәләре формалаштыра. Тыңлай һәм аңлай алыу күнекмәләре үҙ аллы айырым ғына формалашмай. Ул һөйләү, яҙыу, уҡыу күнекмәләре менән аралашып, үрелеп бара.

***Уҡыу*.**

Ҡысҡырып уҡыу. Уҡыу күнекмәһенә өйрәткәндә ҡысҡырып уҡыу бик ҙур әһәмиәткә эйә. Ҡысҡырып уҡыу баланы уҡырға өйрәтеүҙә мөһим урын тота, тиҙ, дөрөҫ, йүгерек, аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен барлыҡҡа килтерә. Әкренләп уҡыу күнекмәләренән аңлап, дөрөҫ, бөтә һүҙҙәр менән ҡысҡырып уҡыуға күсеү ( уҡыу тиҙлеге индивидуаль уҡыу темпына ярашлы була), яйлап уҡыу темпын арттырыу. Тексты аңлы үҙләштереү аша йүгерек уҡыу күнекмәләрен булдырыу. Уҡығанда интонацияның йөкмәткегә тура килеүен күҙәтеп, орфоэпик нормаларҙан тайпылмау. Һөйләмдәрҙе, тыныш билдәләренә иғтибар итеп, интонация менән уҡыу. Төрлө типтағы һәмтөрҙәге текстарҙың мәғәнәүи үҙенсәлеген аңлау һәм уларҙың мәғәнәһен интонация ярҙамында асып биреү. Башҡорт теленең әҙәби тел нормаларын күҙәтеп, һүҙ һәм фраза баҫымына иғтибар итеп уҡыу.

*Эстән уҡыу*. Телмәр органдарының ҡатмарлығынан тыш, һүҙҙәрҙе әйтмәйенсә, күҙ йөрөтөп, текстың йөкмәткеһен аңлап уҡыу. Был уҡыуҙың тиҙлеген яҡшырта, балала уҡыуға ҡарата яуаплылыҡ тойғоһон арттыра, үҙ алллы уҡырға күнектерә.

Эстән уҡығанда уҡыусы текстың, төрлө жанрҙарҙағы һәм күләмдәге әҫәрҙәрҙең мәғәнәһен, төп фекерен, уларҙы уҡыу төрҙәрен билдәләй. текстан кәрәкле

мәғлүмәтте таба белеү күнекмәләрен үҙләштерә. Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен аңлауға эйә була.

Төрлө текстар менән эш

Төрлө төрҙәге текстар тураһында дөйөм мәғлүмәт биреү.

Әҙәби, фәнни- популяр, өйрәтеү текстарының үҙенсәлектәрен, айырмалығын күрһәтеү, сағыштырыу. Был текстарҙың маҡсатын билдәләү. Фольклор - халыҡ ижады өлгөләре менән таныштырыу, мәғлүмәт биреү.

Тексты һөйләмдәр теҙмәһенән практик рәүештә айыра белеү күнекмәләрен барлыҡҡа килтереү; таныш булмаған китаптарҙың йөкмәткеһен исеменә, тышлыҡтағы һүрәтенә һәм биҙәлешенә ҡарап алдан фаразлау.

Текстарҙың темаһын, төп фекерен, структураһын билдәләү, тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү. Төрлө мәғлүмәт менән эшләү күнекмәләрен булдырыу.

Коллектив фекер алышауҙа ҡатнашыу, йәғни, текстан файҙаланып, һорауҙарға яуап биреү, тема буйынса сығыш яһау, башҡаларҙың сығышын тыңлау, өҫтәлмә һәм күргәҙмә материалдарҙы, һүрәттәрҙе әңгәмә барышында дөрөҫ ҡулланыу.

Библиографик культура- китап сәнғәтенең үҙенсәлекле бер төрө. Китап - белем сығанағы. Рәсәйҙә, Башҡортостанда беренсе китаптар, китап сығарыу, өйрәтеү текстары, әҙәби, белешмә китап төрҙәре тураһында дөйөм мәғлүмәт биреү. Китап элементтары менән таныштырыу: йөкмәтке, иллюстация. Ғилми, әҙәби китаптарҙа бирелгән мәғлүмәттәр менән таныштырыу. Китап төрҙәре менән таныштырыу. Китап- әҫәр, китап- йыйынтыҡ, иншалар йыйынтығы, матбуғат баҫмалары, белешмә баҫмалар.

Ктаптарҙы тәғәйенләнгән исемлектән картотека буйынса һайлап алыу. Уҡыусының үҙ йәшенә тура килгән һүҙлектәр һәм белешмә материалдарҙы ҡуллана белеүе.

Әҙәби әҫәрҙең тексы өҫтөндә эш

Әҙәби әҫәрҙең исеме йөкмәткеһенә тура килеүҙе аңлау, уҡытыусы ярҙамында әҙәби тексттың үҙенсәлектәрен билдәләү. Фольклорҙа, йәғни халыҡ ижадында халыҡтың тарихи үҫеш юлында алған тормош тәжрибәһе, аң кимәле, иң яҡшы милли традициялары сағылыуын, ғөмүмән, дөйөм кешелек, әхлаҡ ҡанундары тупланыуын аңлай.

Уҡылған әҫәрҙәрҙең әхлаҡи йөкмәткеһен, геройҙарының үҙ-үҙен тотошон, уларҙың эшләгән эштәрен, ҡылыҡтарын әхлаҡи-мораль күҙлектән анализлау. Изге һәм оло тойғоно - ил тойғоһон төшөнөү. Уҡылған әҫәрҙәрҙә Тыуған илгә һөйө,

ихтирам һаҡлау темаларының төрлө милләт халыҡтары әҫәрҙәрендә сағылыш табыуы. Төрлө милләт халыҡтарының фольклорында темаларҙың һәм идеяларҙың оҡшағанлығы. Телдең тасуирлау сараларын ҡулланып тексты үҙ аллы һөйләү; әҫәрҙең лексикаһын күҙ уңында тотоп, эҙмә-эҙлелек һаҡлау; иллюстрациялар буйынса хикәйә төҙөү һәм һөйләү.

Әҫәрҙәге геройҙарға, телдең тасуирлау сараларын ҡулланып, характеристика биреү. Текстан геройҙы характерлаған һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, әйтемдәрҙе таба белеү. Уҡытыусы ярҙамында геройҙарҙың эш-ҡылығын, уй-теләген анализлау. Геройҙарҙың ҡылығын оҡшашлыҡ буйынса сағыштырыу. Тексты анализлағанда геройҙарға автор биргән характеристика аша яҙыусының үҙ геройны мөнәсәбәтен асыҡлау.

Әҫәрҙең геройына характеристика биреү. Геройҙың портретын, характерын ҡылған эштәре, телмәре аша билдәләү.

Әҙәби тексты һөйләүҙең төрлө төрҙәрен – тулы, һайлап, ҡыҫҡартып һөйләүҙе үҙләштереү.

*Тулы* <u>һөйләү</u> – укыған тексты ентекләп һөйләү ул:фрагменттың төп фекерен билдәләү, терәк һәм мөһимһүҙҙәррҙе ҡулланыу; эпизодты тулы һөйләү, тексты бүлектәргә бүлеү; һәр бүлектең һәм текстың төп фекерен билдәләү; һәр бүлеккә һәм текcҡа исем биреү; текстағы атама һөйләмдәрҙе ҡулланып, һорауҙар, әйтемдәр, тулы һөйләмдәр менән план төҙөү күнекмәләре булдырыу.

Бирелгән фрагмент буйынса үҙ аллы һөйләү, әҫәрҙең геройына характеристика (геройҙы һүрәтләгән һүҙҙәрҙе, әйтемдәрҙе, һөйләмдәрҙе һайлау). Ваҡиға урынын һүрәтләү-яҙыу. Текстағы һүрәтләү өсөн кәрәкле һүҙҙәрҙе, әйтемдәрҙе, һөйләмдәрҙе дөрөҫ ҡулланыу. Төрлө әҫәрҙәге эпизодтарҙы эмоциональ биҙәү, геройҙарҙы ҡылыҡтары буйынса һайлап сағыштырыу.

Өйрәтеү, фәнни-популяр, ҙәби һәм башҡа текстар менән эшләү

Әҫәрҙең йөкмәткеһе исеменә тура килеүен күҙәтеү. Өйрәтеү һәм фәнни–популяр текстарҙың үҙенсәлеген билдәләү (мәғлүмәт тапшырыу үҙенсәлеге). Легендалар, риүәйәттәр, ҡобайырҙар, дин тураһындағы текстарҙың дөйөм үҙенсәлектәренә, айырмалыҡтарына төшөнөү. Төрлө текстарҙың анализлау алымдары менән танышыу;сәбәп- һылтау бәйләнештәрен булдырыу. Текстың төп фекерен билдәләү. Тексты тамамлаған өлөштәргә бүлеү, бәләкәй темалар билдәләү. Тексты һөйләү алгоритмы, схемаларға таянып һөйләү. Тексты тулы һөйләү. Текст йөкмәткеһенең төп фекерен билдәләп, ҡыҫҡартып һөйләү.

Һөйләү (аралашыу мәҙәниәте). Һөйләү, тексты яҙыу кеүек үк, телмәр эшмәкәрлегенең продуктив формаһына инә. Улар икеһе лә фекерләү процесын

сағылдырып, билдәле йөкмәтке, текст, информация барлыҡҡа килтерәләр һәм уны башҡаларға тапшырыу функцияһын үтәйҙәр.

Диалог төҙөү. Диалогтың телмәрҙең бер төрө булыуына төшөнөү. Диалог ике ешенең үҙ-ара һөйләшеүе, фекер алышыуы. Диалогтың (телмәрҙең) үҙенсәлектәре тураһында төшөнсә биреү; бирелгән һорауҙы аңлау, уларға яуап биреү һәм текст буйынса үҙ-ара һорауҙар төҙөү; әңгәмәсене бүлдермәйенсә, итәғәтле формала үҙеңдең фекереңде әйтеп, уҡылған әҫәр ( өйрәтеү, фәнни-популяр, әҙәби текстар) буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыу. Әҫәр тураһында башҡаларҙың фекерен белеү. Тексҡа һәм үҙ тәжрибәңә таянып, үҙеңдең фекереңде иҫбатлау. Һөйләү этикетын дәрестәрҙән тыш шарттарҙа ла иҫтә тотоу, фольклор әҫәрҙәге нигеҙендә этикет үҙенсәлектәре менән танышыу.

Һүҙҙәр өҫтөндә эшләү. Тура, күсмә һәм күп мәғәнәлек тураһында төшөнсә биреү. Маҡсатлы рәүештә актив һүҙлек запасын тулыландырыу.

Монолог.монолог (һөйләү телмәренең бер формаһы) тураһында аңлатма бирелә. Монологик һөйләү телмәрендә берәү һөйләүсе, ә ҡалғандар тыңлаусы ролен башҡара. Һөйләү, информацияны тапшырыу процесы әңгәмәгә ҡарағанда киңерәк, тулыраҡ була.

Тәҡдим ителгән темаға һорау яҙыу формаһында, автор тексына тап килерҙәй, монологик телмәр төҙөү. Тексттың төп фекерен һөйләү процесында сағылдырыу. Фәнни-популяр, өйрәтеү, әҙәби текстарҙағы үҙенсәлектәргә иғтибар итеп, йөкмәткеһенбашҡаларға еткереү. Көндәлек томоштан сығып, әҙәби әҫәрҙәр уҡыу процесында, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрҙе менән танышыу барышында тыуған тәьҫораттарың менән хикәйәләү, бәхес, хөкөмләү, тасуирлау аша уртаҡлашыу. Әйтергә теләгәндәреңде иҫәпҡә алып, үҙ аллы план төҙөү. Фекереңде еткереү барышында монологик телмәрҙең үҙенсәлектәрен сығып, телдең тасуирлау сараларын: антонимдар, синонимдар, сағыштырыуҙарҙы ҡулланыу.

Бирелгән һүрәттәр буйынса уҡылған әҫәрҙәргә, айырым сюжет өлөштәрен файҙаланып, телдән инша төҙөү.

Яҙыу. Яҙыу телмәренә эйә булыу – үҙең ишеткән, күргән, уҡыған, кисергән хәл- ваҡиғаларҙы йәки үҙ башында тыуған фекерҙәрҙе билдәле маҡсатта һәм ситуацияла тулы, дөрөҫ, эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле һәм матур яҙа белеү.

Яҙыу телмәренең үҙенсәлектәре менән танышыу түбәндәге күнекмәләрҙе үҫтереүҙе күҙ уңында тота: әҫәрҙең атамаһы йөкмәткеһенә тура килеп, яҙыу телмәренд геройҙарҙың ҡылығын дөрөҫ сағылдарыу, телдең тасуирлау сараларын урынлы ҡулланыу; билдәле бер маҡсатты күҙ уңында тотоп, төрлөжанрҙа (хикәйәләү, һүрәтләү, хөкөм

йөрөтөү) бәләкәй иншалар ижад итеү; йөкмәткене өҫтәлмә материал менән байытып яҙыу; бирелгән темаға инша яҙыу; баһалма яҙыу.

*Китап уҡыу даирәһе*

Башланғыс мәктәп уҡыусылары үҙләштерә, ҡабул итә алырлаҡ Рәсәй, Башҡортостан халыҡтарының ауыҙ-тел ижади әҫәрҙәрҙе:XIX-XX быуат классиктарының әҫәрҙәре; сит ил яҙыусыларының әҫәре менән танышыу. Тарихи, мажаралы, фантастик, фәнни-популяр китаптарҙы, белешмә материалдарҙы, энциклопедик әҙәбиәтте, балалар өсөн тәғәйенләнгән матбуғат сығанаҡтарын таныу, айыра белеү. Балаларға тәҡдим ителгән төп темалар түбәндәгеләрҙән тора: төрлө халыҡтарҙың фольклоры, Тыуған ил, тәбиғәт, йәнлектәр тураһында әҫәрҙәр, юмористик хикәйәләр; йәмғитте, тормош-көнкүреште; яманлыҡ, яуызлыҡ, мәрхәмәтлелек кеүек сифаттарҙы сағылдырған әҫәрҙәр.

Әҙәби-теоретик белем биреү

(практик өйрәтеү)

Уҡытыусы ярҙамында текстағы тасуирлау сараларының: синонимдарҙың, антонимдарҙың, эпитеттарҙың, сағыштырыуҙарҙың, метафораларҙың, гиперболаларҙың әһәмиәтен билдәләү. Әҫәр геройының портретын, ҡылығын тасуирлау, телмәре, уйҙары тураһында төшөнсә биреү; авторҙың геройға мөнәсәбәтен билдәләү. Һөйләү төрҙәренең композицион үҙенсәлектәре тураһында дөйөм төшөнсә биреү.

Хикәйәләү – теге йәки был ваҡиға тураһында хәбәр итеү, һөйләү. *Һүрәтләү* – пейзажды, портретты, интерьерҙы йәки кешенең тышҡы сифатарын эҙмә-эҙ тасуирлау. Хөкөмләү – уҡыусыларҙың билдәле бер кеше ҡылығы, эше буйынса фекер йөрөтөүен, үҙ фекерен иҫбатлауын, дәлилләүен, һығымта яһауын талап итә торған монологик телмәр (геройҙар монологы һәм диалогы тураһында төшөнсә).

Шиғри һәм проза әҫәрҙең таныу, айырыу, шиғри әҫәрҙең үҙенсәлектәрен (ритм, рифма) билдәләү. Фольклор һәм автор ижад иткән әҫәрҙәрҙе танып айыра белеү һәләттәренә эйә булыу.

Әҫәрҙәрҙең жанр төрлөлөгө. Бәләкәй күләмле фольклор формаларын (бишек йыры, мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар һ. б.) атау, таный белеү, төп мәғәнәһен асыҡлау.

Хайуандар тураһындағы, көнкүреш, тылсымлы әкиәттәр менән таныштырыу. Әкиәттәрҙең художестволы үҙенсәлектәре (һүҙ байлығы, төҙөлөшө) тураһында дөйөм төшөнсә биреү. Авторы билдәле йәки халыҡ яҙған әкиәттәр менән таныштырыу.

Хикәйә, шиғыр, мәҫәл тураһында дөйөм төшөнсә биреү, уларҙың төҙөлөшөн, тасуирлау сараларын табыу. Уҡыусыларҙың ижади эшмәкәрлегендә әҙәби әҫәрҙергә интерпритация биреү. Әҙәби әҫәрҙәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, сәхнәләштереү; телдән һүрәтләү, текстар өҫтөндә эшләгәндә төрлө эш алымдары ҡулланыу ысулдары менән

таныштырыу. Хәл-ваҡиғаларҙың тәртибен, эш этабын, башҡарыуҙың эҙмә-эҙлеклеген тәьмин итеү; инша элементтары менән изложение яҙыу күнекмәләрен булдырыу. Уҡыған әҫәргә оҡшатып, бирелгән иллюстрациялар буйынса һәм үҙеңдең тәжрибәңә нигеҙләнеп текст ижад итеүгә өлгәшеү.

Дәрестә әҙәби тыңлауҙы ойоштороу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Бала ғаиләлә 2-3 йәшенән әкиәт тыңлауға күнегә.Уны уға ата-әсәһе, йә өләсәһе-олатаһы, ҡартәсәһе-ҡартатаһы һөйләп тыңларға өйрәтә. Шулай итеп,әҙәби тыңлауға нигеҙ балаға кесе йәштән ғаиләлә һалына башлай.Ҡыҙғанысҡа ҡаршы,ҡайһы бер ғаиләләрҙә әкиәт һөйләүҙе кәрәкле тип тапмайҙар.Был-мәктәпкәсә йәштәге бала өсөн ҙур юғалтыу.Психологтар билдәләнеүенсә, биш йәштә бала,нигеҙҙә, шәхес булып формалаша.Был йәштә уны насар ғәҙәттәрҙән аралау-төп бурыстарҙың береһе.Был йәһәттән балаға әкиәт тыңлатыу,әкиәт геройҙары өлгөһөндә кешегә хас яҡшы һәм насар сифаттар менән маҡсатлы рәүештә таныштырыу,ыңғай сифаттарҙы кире сифаттарҙан айырырға өйрәтеү ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә.

Тәүге биш йыл-баланың үҫешендә иң яуаплы осор.Ошо арауыҡта балаға әкиәттәр,шиғыр.хикәйәләр һөйләү-уны шәхес итеп формалаштырыуҙа төп сараларҙың береһе булып тора.

Әҙәби тыңлау-баланы китап уҡыуға ҡыҙыҡһындырыу,уға ылыҡтырыу,уҡыу эшмәкәәрлеген формалаштырыуҙың мөһим бер формаһы.Уны системалы ҡулланыу яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

Уҡытыу һөҙөмтәһендә башланғыс мәктәптә балала артабан белем алырға әҙерлек, кәрәкле әҙәби үҫеш кимәле булдырыуға теләк уянасаҡ. Был түбәндәге күнекмәләрҙе булдырыуҙы күҙаллай:

- тирә-йүнде өйрәнгәндә туған тел дәресенең тотҡан урынын һәм ролен төшөнөү, уҡыуҙың мәҙәниәтле кеше тәрбиәләүҙәге ролен аңлау, шәхси сифаттарҙы һәм социаль ҡиммәттәрҙе тәрбиәләү;
- әҙәбиәттең дөйөм кешелек сифаттары тәрбиәләүҙәге әһәмиәтен аңлау;
- әҙәби текстар өҫтөндә эстетика һәм әхлаҡ күҙлегенән сығып эш итеү. Әҙәбиәттең сәнғәттең бер төрө икәненә төшөнөү, аңлау;
- әҙәби жанрҙы билдәләү, геройға характеристика биреү өсөн анализлау, сағыштырыу алымдарын ҡулланыу; тексты һөйләй белеү күнекмәләренә эйә булыу;
- үзеңә кәрәкле информацияны әҙәби, фәнни- популяр, өйрәтеү текстарынан таба белеү;

- энциклопедик, белешмә баҫмалар менән эшләү күнекмәләренә эйә булыу

**1-се класта ”Әҙәби уҡыу” дәрестәренең тематикаһы, төп бүлектәр**

**Мин уҡый беләм (1 сәғәт)**

Әҫәрҙең жанр төрөн билдәләү. Анализ.Шиғырҙы дөрөҫ,аңлы,етеҙ,тасуири уҡыу Китап сығарыу эше менән танышыу,мәғлүмәт алыу.

**Әкиәт уҡырға яратам (5 сәғәт)**

Әкиәтте тыңлау,уҡыу.Унның йөкмәткеһе өҫтөндә эш.Һорау төҙөргә өйрәнеү,яуап алыу.Эш дәфтәрендә һығымталар яҙыу.План-модель буйынса эш.Логик фекерҙе үҫтереүгә кроссворд, сәхнәләштереү.

**Атай-ғаилә башлығы (4 сәғәт)**

“ Минең ғаиләм”темаһына әңгәмә ҡороу.Һүҙлек эшен ойоштороу. Аңлы,дөрөҫ,шыма уҡыу.Эш дәфтәрендә күнегеүҙәр үтәү.

**Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр (6 сәғәт)**

Әсәйҙәр тураһында йәнле һөйләшеү ҡороу , төп фекерен асыҡлау.Эш дәфтәрендә күнегеүҙәр.Планға ярашлы эш шарттарын үтәү.

**Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт (3сәғәт)**

Йыл миҙгелдәрен айырыу,тәбиғәттең матурлығын күреп,тойоп тасуири,дөрөҫ уҡыуға өйрәтеү.Эш дәфтәрендә тикшереү эштәре.Йомғаҡлау дәресе.

Программаға ингән уҡыу өсөн бирелгән текстар 1-сенән алып 4-се класҡа тиклем күләме яғынан яйлап үҫә барыу тәртибендә бирелгән.Һәр класс өсөн уҡыу текстары баланың психик һәм физик үҫешен иҫәпкә алып һайлап алынған.Был йәштәге балаларҙың күңел ҡылдарын тирбәтерлек эмоциональ характерҙағы,сағыу сюжетлы,уларҙың булмышына,үҙҙәре йәшендәге балалар тормошона хас булған ситуация,хәл-ваҡиғаларға бай булған сюжетлы әҫәрҙәр индерелгән.

1-се класс программаһына индерелгән”Атай-ғаилә башлығы” “Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр”бүлектәрендә шиғыр,әкиәт,хикәйәләр баланы уратып алған яҡын кешеләре: атай,әсәй,ҡартатай,ҡартәсәй,олатай,өләсәй,ағай, апай, һеңлеләре тураһында.Был бүлектәге әҫәрҙәр туғанлыҡ хистәрен тағы ла тәрәнерәк тойорға,туғандарына иғтибарлы,

яғымлы,ярҙамсыл булырға өйрәтә.Балаға был текстар ярҙамында етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләре бирә башлайбыҙ. “Әҙәби уҡыу”дәреслегендә “Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт”бүлеге етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен үҫтереү,хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү,йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү,йөкмәткеһен текстҡа яҡын итеп һөйләп өйрәнеү һәм тасуири уҡыу кеүек күнекмәләрҙе формалаштырыуға ҡоролған.

Баланың мәктәптәге уңыштары туранан-тура уның уҡыу оҫталығына,етеҙ һәм аңлы уҡый белеүенә бәйле.Грамотаға өйрәнеү осоронда уҡытыусы баланы өйрәнгән хәрефте һүҙҙә танып,һүҙҙе дөрөҫ итеп һалмаҡлап (ижекләп) уҡырға өйрәнһә,йыл аҙағына бала темпты бер ни тиклем шәбәйтеп,һәйләмде,тексты аңлап уҡырға өлгәшә.Беренсе кластың тәүге ярты йыллығында баланы кысҡырып уҡырға өйрәтәбеҙ,икенсе ярты йыллыҡта эстән уҡыуға күнектерә башларға кәрәк.Был ваҡытта уҡыусы шыбырлап уҡыһа, йыл аҙағында инде тексты тик күҙ йөрөтөп,тулыһынса эстән уҡыу оҫталығына эйә булырға тейеш.Дәреслектә бирелгән материал баланың етеҙ уҡыу техникаһын үҫтереү менән бер рәттән уға белем бирергә,ыңғай тойғолар тәрбиәләргә,уй-кисереүштәр донъяһында сәйәхәт итергә мөмкинлектәр тыуҙыра,халҡыбыҙҙың бай мираҫы менән таныштыра.

**Уҡыу техникаһы**

Һалмаҡлап,ижекләп(оҙон һүҙҙәрҙе) һәм тулы һүҙҙәр менән дөрөҫ итеп, йыл аҙағына минутына 25-30 һүҙ уҡыу.

**Уҡыу йылы аҙағына 1-се класс уҡыусыһының әҙерлек кимәленә талаптар**

Уҡыусы:

-әкиәт,хикәйә,шиғыр тыңлай,

-һалмаҡлап,ижекләп(оҙон һүҙҙәрҙе) һәм тулы һүҙҙәр менән уҡый,

-текстың төп йөкмәткеһен аңлай,

-текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап бирә,

-ҙур булмаған текстарҙы енткләп һөйләй белергә,

-5-6 шиғырҙы яттан һәйләй белергә тейеш,

Күрһәтелгән әхләки төшөнсәләрҙе:

-яҡшылыҡты һәм насарлыҡты,

-бөтә тереклеккә кешелекле мөнәсәбәттә,

-атай-әсәйгә,яҡындарыңа йылы хис-тойғоло һәм ҡайғыртыусан булырға,

-тирә-йүндәге матурлыҡты тоя белергә тейеш.

## 2 класс

**Уҡы, эшлә, аҡыл йый! (4сәғәт)**

Мин уҡыусы. Ф. Туғыҙбаева, Баҫҡыс. Ф. Иҫәнғолов, Ҡанатһыҙ турғай. З. Кускилдина, Кешегә кәрәк белем. Ш.Биҡҡолов

**Халҡым йыйған ынйылар (6 сәғәт)**

.Бишек йырҙары Әшкәк-бешкәк, йәки беҙҙең уйыныбыҙ. Б. Исҡужин . Бармаҡтар менән уйындар.Һамаҡтар. Мәҡәлдәр -ололар һүҙе. Фәстереүҙәр. Таҡмаҡтар. Шаяртыуҙар Кластан тыш уҡыу.

**Әкиәт укырға яратам (13сәғәт)**

А.Йәғәфәрова.Беҙ әкиәт тыңлайбыҙ. Ҡарт менән дейеү. Төлкө менән әтәс.Төлкө менән айыу. М.Ғабдрахманов.Айыухас менән Айыукәс мәктәптә. Аҡ муйынсаҡ. М. Пришвин Г.Х.Андерсен. Борсаҡ өҫтөндәге принцесса. Кластан тыш уҡыу. .Саҡырылмаған ҡунаҡ. З. Кускилдина. Д.Талхина.Күгәрсен күҙҙәре. А.Ғарифуллина.Терпе ниңә энәле? М.Мөсөфуллин.Төлкө менән ҡырмыҫҡа. Ай аҡылға ултыртты. Баҙлауыҡ (япон халыҡ әкиәте) Төлкө менән кәзә тәкәһе (рус халыҡ әкиәте)

**Шып-шым булдыҡ, тынғанбыҙ, беҙ бит шиғыр тыңлайбыҙ (6 сәғәт)**

Әсәйемдең ҡулы күп. Ф. Туғыҙбаева, Көсөк. А.Докучаева, Көсөк. Ҡорот. С. Ғәләүетдинов “Балыҡсы” Айтуған бабай. Ф. Туғыҙбаева, Бесәйҙең өйө яна (рус халыҡ әкиәте)

**Тәбиғәт- матурлыҡ,байлыҡ, һаҡлаһын уны бар халыҡ (8сәғәт)**

Б.Ноғманов.Урман китабы, А.Игебаев.Урмансы малай. Шыҡыйыусы, шәп йүгереүсе ҡоштар. Ғ.Ишбулатов. Ф.Иҫәнғолов.Тыңлауһыҙ сана менән саңғы. . Йәғәфәрова. Сәнскеле күлдәк. Кластан тыш уҡыу. Ҡарҙағы яҙыуҙар.Ф. Фәтҡуллина Н.Игеҙйәнова.. Тирәк

**Әҙәп төбө матур ғәҙәт( 16сәғәт)**

Таҡмаҙа.Үсекләүҙәр.Ф.Иҫәнғолов. Флүрәнең ғәйебе нимәлә? Зоосиныф Ф.Иҫәнғолов. Ҡыҙҙар менән уйнарға яраймы?. Ф.Фәтҡуллина.Ҡунаҡ табыны. С.Яҡупов.Кем маҡтансыҡ. А.Йәғәфәрова.Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар. Г.Яҡупова.Рәхмәт яуғанда. С.Муллабаев .Сәләмең ҡайҙа? Ф.Иҫәнғолов.Батырҙар..Кластан тыш уҡыу. Ф.Иҫәнғолов.Ғәбиттең сере нимәлә?. А.Толстой. Ҡандала, Ф.Иҫәнғолов. Һин ни эшләр инең? Ф. Туғыҙбаева. Үсегеүсән бер малай, Ф.Иҫәнғолов. Нимә тип яуап бирер инең? Ж.Кейекбаев. Оморҙаҡ бабай.

**Тыуған йортом,ерем- минең күңел нурым!** (5сәғәт)

Г. Ғәлиева. Мин йәшәйем Уралда. Й.Солтанов.Өфө-беҙҙең баш ҡалабыҙ. Р.Янбулатова.Өфө-баш ҡалам. М.Садиҡова.Тыуған яҡтарым һәйбәт!. Ә.Вәхитова.Алмағастар ултыртабыҙ. З. Кускилдина. Өй туйы . Кластан тыш уҡыу. Бәпембә.Дарыу үләнлре. В.Исхаков.Үгәй инә үләне.Әрем.Кесерткән.

**Байлыҡ, муллыҡ- тормош етеш, хеҙмәттән алған емеш (10сәғәт)**

Ф. Иҫәнғолов. Өлгөргәнлек һынауы, Р. Әбүталипова. Уңған уң ҡул, А. Ғәрифуллина. Көтөлмәгән осрашыу, Н. Игеҙйәнова. Янғын, Ә. Ихсан. Әсә рәхмәте, Г. Яҡупова. Ярғанат, Г. Ситдиҡова. Сер, Кластан тыш уҡыу, Ф. Зыятдинова. Бик ярата мине эш, Йомғаҡлау дәресе

тәрбиәләргә; Китап менән үҙ аллы эшләү күнекмәләрен үҫтерергә.

**3-сө класта**

**Белем байрамы (1 сәғәт)**

Уҡыусыларҙы үҙҙәре укыған мәктәптең тарихы.уны тамамлап сыҡҡан күренекле кешеләр менән таныштырыу. Уҡыусыларҙың йәйге ялы тураһында һөйләшеү.Белем байрамы.мәктәп,уҡыу,белем алыу тураһында әңгәмәләшеү.Халыҡ ижадынан уҡыу, белем тураһында мәҡәл, әйтемдәрҙе иҫкә төшөрөү, мәғәнәләрен аңлатыу.Тасуири укыу күнекмәһен үҫтереү.

**Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар (6 сәғәт)**

Уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереү,һүҙ байлығын арттырыу,тасуири уҡыу күнекмләрен булдырыу өҫтөндә эште дауам итеү.Каникулды кемдең ҡайҙа үткәреүе.ауыл, ял,хеҙмәт,яңы дуҫтар тураһында һөйләшеү ҡороу.Уҡыусыларҙы укылған әҫәргә ҡарата үҙҙәренең фекерен әйтеп бирергә,мәҙәниәтле итеп бәхәс ҡорорға өйрәтеү.Тексты өлөштәргә бүлеү,уларға исем ҡушыу; һәр абзацтың төп фекерен белдереүсе һөйләмдәрҙе табып,текстың йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә (11 сәғәт )**

Башҡортостандың көҙгө тәбиғәт күренештәре,ҡала һәм ауылда көҙгө эштәр; ҡоштар,хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо,көҙгө байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу.Көҙ тураһында мәҡәл,әйтем,һынамыштар йыйыу. Әҙәбиәт ғилеменән цитата, сағыштырыу,һүрәтләү,йәнләндереү саралары менән таныштырыу. Төрлө шағирҙарҙың шиғырҙарын сағыштырып укып, уларҙың үҙенсәлектәрен асыҡлау. Һүҙлек эшенә етди иғтибар биреү, укыусыларҙың һүҙ байлығын үҫтереү. Ижади эштәрҙе иғтибар үҙәгендә тотоу.

**Әҙәптең төбө-ғәҙәт ( 13 сәғәт )**

Бер –берең,шулай уҡ ата-әсәләр,туғандар,дуҫтар менән мөнәсәбәт тураһында әңгәмәләшеү. Ысын дуҫ төшөнсәһенең ҙур мәғәнәгә эйә булыуы.Кешеләрҙә яҡшы һәм насар сифаттар,уларға мөнәсәбәт.Һаналған проблемалар буйынса әҫәрҙәр уҡыу,һөйләшеү,үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү.Этнопедагогик тәрбиәгә иғтибар биреү.Тәҡдим ителгән әҫәрҙәр аша укыусыларға әҙәп,әхлаҡ ҡағиҙәләрен еткереү, әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылыҡтарына баһа биреү, халыҡ ижадынан мәҡәл,әйтемдәрҙе иҫкә төшөрөү,йыйыу, мәғәнәләрен аңлатыу, телмәрҙә урынлы ҡулланырға өйрәтеү.Уҡылған

әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар биреү,иптәштәренең яуаптарын ихтирам менән тыңлау күнекмәләрен булдырыу.Тасуири уҡыуға етди иғтибар биреү.

**Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа ( 7 сәғәт)**

Башҡортостанда ҡыш, уның билдәләре,балаларҙың ҡышҡы уйындары һәм байрамдары тураһында уҡыу,һөйләшеү ҡороу.Тәбиғәтте күҙәтеү,ҡыш, уның билдәләре, балаларҙың ҡышҡы уйындары һәм байрамдары тураһында уҡыу,һөйләш ҡороу. Тәбиғәтте күҙәтеү,ҡыш көнө йәнлектәр һәм ҡоштар тормошо. Башҡорт халҡының боронғо кәсебе-һөнәрсылыҡ тураһында белешмә биреү. Текстарҙан сағыштырыу,йәнләндереүҙәрҙе табыуға ҡоролған эштәрҙе дауам итеү,уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү. Ролләп уҡыу, сәхнәләштереү күнекмәләрен үҫтереү. Ҡыш миҙгеленә арналған һүрәттәр төшөрөү,шиғыр,хикәйә, әкиәттәр ижад итеү.

**Йортом, илем, халҡым, киләсәгем...(13 сәғәт )**

Уҡыусы аңында үҙе йәшәгән ерҙең-Башҡортостандың тарихы,уның байлығы,күренекле шәхестәре, батырҙары хаҡында бер бөтөн фекер тыуҙырыу һәм ул турала ябай ғына итеп һөйләп биреүҙәренә өлгәшеү Был теманы үткәндә мәғлүмәттәрҙең тулы һәм тарихи яҡтан дөрөҫ яҡтыртылыуына иғтибар итергә кәрәк.

Әҙәбиәт ғилеменән ҡобайыр менән таныштырыу.Башҡорт халҡының тарихына, күренекле шәхестәренә, башҡорт халыҡ йырҙарының тарихына, халыҡ йырҙарын башҡарыусыларға, данлыҡлы ҡурайсыларға ихтирам, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Тарихи әҫәрҙәрҙе уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Әкиәт уҡырға яратам (10 сәғәт)**

Халыҡ ижадының бер төрө булған әкиәттәр менән таныштырыу.

Түбәндәге кластарҙа әкиәт тураһында алған төшөнсәләрҙе иҫкә төшөрөү,әкиәттәрҙең төҙөлөшөн, башҡа жанрҙарҙан айырмаһын,һөйләү үҙенсәлектәрен билдәләү.Халыҡ әкиәттәре һәм яҙыусылар ижад иткән әкиәттәр.Тылсымлы әкиәттәр,батырҙар тураһында, тормош-көнкүреш әкиәттәре тураһында ҡыҫҡаса аңлатма биреү.

План буйынса әкиәтте тулы итеп һөйләү күнекмәһен артабан камиллаштырыу, үҙ аллы план төҙөргә өйрәтеү, уҡыусыларҙың һүҙ байлығын үҫтереүгә етди иғтибар биреү.

**Илде иңләп, йәмле яҙ килә (7 сәғәт )**

Яҙ бүлегендә ике байрам-1Май һәм Еңеү байрамы,яҙғы күренештәр,ҡоштарҙы ҡаршылау,баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү.Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы.Ветерандарҙы осрашыуға саҡырыу,һәйкәлгә сәскәләр һалыу.

Яҙ миҙгелен тасуирлаусы шиғыр, хикәйәләрҙе аңлы,тасуири,етеҙ уҡыу,һүрәтләү,йәнләндереү,сағыштырыуҙарҙы табыу, яҙғы тәбиғәт, яҙғы баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү ҡороу.Ветерандарға ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

3-сө кластағы уҡыу материалдары тематик принципҡа нигеҙләнеп ҡоролған ("Белем байрамы", "Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар", "Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә", "Әҙәптең төбө-ғәҙәт", "Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа", "Йортом, илем, халҡым, киләсәгем", "Әкиәт уҡырға яратам", "Илде иңләп йәмле яҙ килә"). Программала әҙәбиәт теорияһы өлкәһенән төрлө жанрҙарҙа йыш ҡулланылған телде матурлау саралары булған сағыштырыуҙар, һүрәтләүҙәр, йәнләндереүҙәр тураһында тәүге төшөнсәләр биреү ҡаралған. Был төшөнсәләрҙе ғәмәли үҙләштереү өсөн уларҙы әҙәби текстарҙа табыу, анализлау һәм, шундай поэтик тел сараларын ҡулланып , үҙ аллы ижад иттереү күнекмәләре үткәреү фарыз. 3-сө кластың "Туған тел" дәреслегендә "Тиҫтерҙәрең ижад итә! Һин дә ижад ит!" тигән атама аҫтында республикала башҡорт телендә балалар өсөн сыҡҡан гәзит-журналдарҙан һайлап алынған балалар ижад иткән дүрт юллыҡ шиғырҙар, бәләкәс кенә әкиәт, хикәйәләр урын алған.Тиҫтерҙәренең ижады бала өсөн өлгө булып, уны үҙ аллы ижад итеү һәләтен асыуға этәргес булып тора.

Балаларҙың етеҙ, аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәһен формалаштырыу - уҡыу йылы аҙағына ҡарата ҡуйылған төп талап.

**Уҡыу техникаһы**

Тексты тасуири итеп, аңлы уҡыу. Уҡығанда мәғәнә яғынан әһәмиәтле һүҙгә баҫым яһау. Һөйләмдәрҙе һәм тексты бүленештәрен береһен икенсеһенән айырып уҡыу.

Минутына **65-70** һүҙ уҡыу. Эстән уҡығанда минутына **85-90** һүҙ уҡыу.

**Кластан тыш уҡыу сәғәт (13 сәғәт )**

Кластан тыш уҡыуҙың төп маҡсаты - уҡыусыларҙы балалар әҙәбиәте менән тәрәнерәк таныштырыу, ата-бабаларыбыҙ туплаған рухи байлыҡты байҡау, китапҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу, үҙ аллы даими уҡыу күнекмәләре булдырыу.

Уҡыу тематикаһы.Башҡорт һәм башҡа милләт яҙыусыларының балалар өсөн төрлө темаға һәм төрлө жанрҙа яҙылған әҫәрҙәре. "Йәншишмә" гәзите, "Аманат", "Аҡбуҙат" журналдары.

Мостай Кәрим, Мәжит Ғафури, Зәйнәб Биишева, Мәрйәм Бураҡаева, Фәүзиә Рәхимғолова, Кәтибә Кинйәбулатова, Раил Байбулатов һ.б., шулай уҡ рус һәм сит ил классиктарының балалар өсөн яҙған күренекле әҫәрҙәре.

**Уҡыу йылы аҙағына 3-сө класс уҡыусыһының әҙерлек кимәленә талаптар**

Уҡыусы:

- тексты аңлап, тасуири уҡый белергә;
- тексты эстән уҡый белергә,
- уҡыған әҫәрҙең темаһын һәм төп асылын, мәғәнәһен билдәләй белергә;
- әҫәрҙең исемен, авторын атай белергә;
- әҫәрҙең йөкмәткеһенә тап килерлек интонация һайлай белергә; темп һәм тонды дөрөҫ билдәләп, логик баҫым, пауза ҡуйып, тейешле тауыш менән уҡый белергә;
- уҡылған әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан өлөштәргә бүлеп, планын төҙөй белергә;
- әҫәрҙе ентекле итеп, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле һөйләй белергә;
- әҫәрҙе ҡыҫҡаса һөйләй белергә;
- әҫәрҙең йөкмәткеһе, идея-тематикаһы буйынса әңгәмәләшә белергә;
- 8-9 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белергә.

**4-се класта**

**Һаумы,мәктәп!(1сәғәт )**

Балаларҙа уҡыу эшенә етди ҡараш,уҡыу дәрте,ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.Әҫәр уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу, уҡыуҙан алған тойғоларҙы,кисерештәрҙе киңәйтеү һәм тәрәнәйтеү, яҙыусының әйтергә теләгән төп фекерен билдәләү.

**Мостай Кәрим ( 4 сәғәт )**

“Беҙҙең өйҙөң йәме” повесе аша уҡыусыларҙың алдында “ябайлыҡтың-матурлығы “, “матурҙың-ябайлығы”н асыу күҙаллана. Алты –ете йәшлек бала ауыҙынан һөйләтелгән был әҫәрҙә Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт ауылдарына алып к илгән ауырлыҡтарын, ир-аттар фронтҡа киткәс,ҡатын-ҡыҙҙарҙың, йәш үҫмерҙәрҙең,ҡарттарҙың колхоздағы бөтә эште үҙ елкәләренә йөкмәп ҡалыуын,яҡындарҙы юғалтыу ҡайғыһын һәм еңеү шатлығын уҡыусыларға аңларлыҡ һәм зиһененә һеңеп ҡалырлыҡ итеп еткереү.Дәһшәтле һуғыш йылдарында илебеҙҙең халыҡтары араһындағы дуҫлыҡты тағы ла нығытып, дуҫлыҡ-туғанлыҡты ябай итеп күрһәтеү. Әҫәрҙә балалар

менән өлкәндәр мөнәсәбәтен күрһәтеү: оло кешеләрҙең һәр бер хәрәкәте, эш-ҡылыҡтары, үҙ-ара мөғәләмәләре, донъяға ҡараштары йәш быуынды тәрбиәләй.

**Зәйнәб Биишева ( 3 сәғәт)**

Балаларҙа ижтимағи тормошҡа, файҙалы хеҙмәткә ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләү. Уларҙың уҡыуы,уйыны, бергәләп эшләүҙәре, эҙләнеүҙәре процесында коллектив булып ойоштороуҙарын иғтибар үҙәгендә тотоу.Балалар образын тыуҙырғанда, уларҙың эске донъяларына, тәрән кисерештәренә, характерҙың үҫешенә айырыуса иғтибар итеп, теләк-ынтылыштарына бәйләп күрһәтеп, мәҫәл жанры менән таныштырыу. Тасуири уҡыу күнекмәләрен нығытыу.

**Динис Бүләков ( 5сәғәт)**

Әҫәрҙә ысын хеҙмәттең тәме, ялған һәм хаҡлы дан, ысын батырлыҡ һәм тышҡы ялтырау, тәкәберлек һәм баҫалҡылыҡ кеүек сифаттар конкрет персонаждарҙың образдары ярҙамында асыла һәм халыҡтың тәжрибәләр менән һаналған тапҡыр һүҙҙәре, мәҡәлдәр менән нығытыла.

**Яныбай Хамматов ( 3 сәғәт)**

“Салауат “ , “Һырдарья” романдарынан өҙөктәрҙе өйрәнеү үрнәгендә жанр(роман) тураһында әҙәби- теоретик төшөнсә биреү. Әҫәрҙә һүрәтләнгән тарихи осор, Башҡортостандағы ижтимағи сәйәси хәл тураһындағы мәғлүмәттәрҙе уҡыусыларға еткереү шарт. В факттарҙы геройҙарҙың эштәрен сағыштырыу,баһа биреү,әҫәрҙең төп фекерен табыу,һығымталар яһау-быларҙың бөтәһе тарихи материалды аңлап үҙләштерергә ярҙам итә.

Инеш әңгәмәлә геройҙарҙың кем булыуын, балаларҙың улар тураһында нимәләр белеүен, ниндәй әҫәрҙәр уҡығанын асыҡлау Әҫәрҙе уҡып һөйләтеү, план төҙөү, геройҙарға характеристика биреү, уларҙың тарихта тотоҡан урынын билдәләү. Тарихи әҫәрҙәр уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Абдулхаҡ Игебаев ( 2 сәғәт)**

Әҫәрҙең сюжеты лирик геройҙың уй-фекерҙәренә,.кисерештәренән,һоҡланыуҙарынан тора.Һәр һүрәтләү әҫәрҙең йөкмәткеһен һәм идеяһын аса. Урал тәбиғәтенең матурлығын күҙ алдына баҫтыра.

Поэманың тексы өҫтөндә эшләгәндә түбәндәге эш этаптарына иғтибар итергә: һүҙлек,фразеологик эш, уҡыусының тасуири уҡыуы һәм аңлатып биреү, әңгәмә, әҫәрҙең төп идеяһын билдәләү, уҡыусыларҙың үҙ аллы эштәрен ойоштороу.

**Ноғман Мусин ( 5 сәғәт)**

Кескәй уҡыусыларҙы ғаләмдең, тәбиғәттең әлегә улар өсөн сер булып ҡалған төрлө яҡтары менән таныштырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйылған әҫәрҙәр урын алған.

Әҫәрҙәрҙә тәбиғәт донъяһы менән таныштырыу кешеләрҙең шул тәбиғәткә һәм бер-береһенә мөнәсәбәтенә ҡағылған әхлаҡи проблемалар менән дә тығыҙ бәйләп алып барыла.

Хикәйәләрҙә хайуандарҙың, үҫемлектәрҙең насар бәндәләрҙән күргән йәберҙәрен уларҙың кисерештәре аша күрһәтеү балаларҙың тойғоһона тәьҫир итеү һәм тәбиғәткә һаҡсыл, мәрхәмәтле мөнәсәбәт тәрбиәләү маҡсаты ҡуйылған.

**Фәрит Иҫәнғолов (4 сәғәт)**

Хикәйәләрҙә балаларҙың тәбиғәткә мөнәсәбәте уның ябай ғына серҙәрен асыуҙа, ҡоштарҙы, хайуандарҙы тәрбиәләүҙә күрһәтелә. Әҫәрҙәрҙә үҫмерҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашыуы кеүек көндәлек ваҡиғаларҙан алып, илһөйәрлек тойғоларын сағылдырыусы ситуацияларға тиклем, йәш геройҙарҙың рухи-әхлаҡи йөҙөн асыусы төрлө ваҡиғалар яҡтыртыла. Үҙ аллы уҡыу күнекмәләрен нығытыу.

**Кәтибә Кинйәбулатова ( 3 сәғәт)**

Әҫәрҙәрҙә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы тыл тормошо, унда балаларҙың, үҫмерҙәрҙең яҙмышы сағылдырыла. Йәш үҫмерҙәрҙең алдарында торған бурысты дөрөҫ аңлауҙары, өҫтәренә төшкән ауырлыҡтарҙы ғорур күтәреүҙәре,киҫкен һынауҙарҙа характерҙары сынығыуы күрһәтелә.

**Сафуан Әлибай ( 2 сәғәт)**

Балалар был бүлеккә ингән әҫәрҙәрҙе уҡып, уларға анализ яһап, тылсымлы ҡыш һәм алтын көҙ тәбиғәтенең үҙенсәлекле күренештәре менән таныша. Ике миҙгелдең тәбиғәтен сағыштырыу, айырмалыҡтарын билдәләү аша һәр миҙгелдең үҙенә генә хас күркәмлегенә баҫым яһау.

Балаларға эстетик тәрбиә биреү, уларҙа тыуған яҡтың тәбиғәтенә, туған телгә мөхәббәт тәрбиәләү – әҫәрҙе өйрәнеүҙә төп маҡсат булып тора. Тасуири һәм һайлап уҡыу күнекмәләрен нығытыу.

**Фәүзиә Рәхимғолова ( 4сәғәт)**

Хикәйәләрҙә хеҙмәттең тормоштағы бөйөк ролен аңлауҙа өлкәндәрҙең шифалы йоғонтоһо һәм кесе йәштәге геройҙарҙың эш өҫтөндә тәрбиәләнеүе һүрәтләнә. Әҫәрҙәрҙә ыңғай геройҙар һәм уларҙың күркәм эштәре, тормош сынығыуҙары күрһәтелә. Балаларҙың ата-әсәләренә, өлкәндәргә ярҙамлашыуы, хеҙмәт барышында тыуған һәм нығынған уй-фекерҙәре сағыу буяуҙар аша бирелә.

**Факиһа Туғыҙбаева (1сәғәт)**

Шиғырҙарҙа ысын хеҙмәттең еңел булмауын, кешеләрҙән тырышлыҡ, оло көсөргәнеш, түҙемлек, таҫыллыҡ талап итеүен күрһәтә, хеҙмәт кешеһенең бөйөклөгөнә

инандыра, хеҙмәткә мөхәббәт темаһы уның емешенә, бигерәк тә игенсе тире менән һуғарылған икмәккә ихтирамлы ҡараш мәсьәләһе менән дә берләштерелә.

**Наил Ғәйетбай ( 3сәғәт)**

Әҫәрҙәрҙә хеҙмәт тәрбиәһе балалар аңларҙай төшөнсәләр һәм образдар аша бойомға ашырыла. Был тема балаларҙың физик һәм аҡыл эшенә төрлөсә мөнәсәбәтен сағылдырыу ярҙамында хәл ителә. Балалар характерындағы ыңғай һәм кәмселекле яҡтары уларҙың хеҙмәтенә, өлкәндәргә ҡарашы аша һүрәтләнә.

**Гөлфиә Юнысова ( 1сәғәт)**

Әсә һәм Ватандың бөйөклөгө, гүзәллеге, улар менән ғорурланыу – шиғырҙарҙың төп йөкмәткеһен тәшкил итә. Әсәгә һәм Тыуған илгә һөйөү, шатланыу, шул ерҙә тыуып үҫеү менән ҡыуаныу тойғолары баланың күңеленә ғүмерлеккә һеңеп ҡалған “киң туғайҙар”, “алтын бешә торған баҫыуҙар”, “түңәрәк күл”, “күкһел тауҙар” аша сағыла.

**Раил Байбулатов ( 4сәғәт)**

Хикәйәләрҙә балаларҙың уйындары, ҡыҙыҡһыныуҙары, үҙ-ара дуҫлыҡтары менән бәйле төрлө ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс ваҡиғалар һүрәтләнә.

Балалар араһындағы берсә ҡаршылыҡлы, берсә эскерһеҙ йылы мөнәсәбәттәр, дуҫлыҡтың нисек нығыуы, батырлыҡҡа ынтылыуы үҙенсәлекле итеп һүрәтләнә. Яҙыусы уларҙың эске донъяларына, тәрән кисерештәренә айырыуса иғтибар итә, характерҙарының үҫешен конкрет ситуацияларҙа күрһәтә.

**Рәис Ғабдрахманов ( 5сәғәт)**

Яҙыусы балаларҙың ижтимағи тормошҡа, файҙалы хеҙмәткә ҡатнашырға ынтылыштарын мажаралы ваҡиғалар ярҙамында һүрәтләй.

Әҫәрҙәрҙә төрлө ситуцияларҙа балалар характерында булған тиҫкәре сифаттар тәнҡит ителә; ысын хеҙмәттең тәме, ялған һәм хаҡлы дан, дуҫлыҡ ҡәҙере кеүек сифаттар конкрет персонаждарҙың хәрәкәттәре менән һыналған тапҡыр һүҙҙәре, мәҡәлдәре менән нығытыла.

**Марс Әхмәтшин ( 3сәғәт)**

Хикәйәләр балаларҙың эштәре, уй-хыялдары, үҙ-ара мөнәсәбәттәре, үҫмерҙәрҙең үҙ ҡылығы,тормоштағы урыны һәм яуаплылығы хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Үҫмерҙәрҙең йәмәғәт эштәрендә ҡатнашыуы кеүек көндәлек ваҡиғаларҙан алып, романтик ынтылыштарын, илһөйәрлек тойғоларын сағылдырыусы ситуацияларға таянып, йәш геройҙың рухи-әхлаҡи йөҙөн асыусы төрлө факттар яҡтыртыла.

**Фәрзәнә Аҡбулатова ( 2сәғәт)**

Был әҫәрҙәр балаларҙың тормошто аңлау, эстетик ҡабул итеү ҡеүәһенә тәрбиәүи маҡсаттан сығып бирелә. Уларҙа һүҙ балалар ауыҙынан алып барыла, сабыйҙарҙың тормош күренештәренә үҙ ҡарашы, тойғолары, эске кисерештәре сағылдырыла.

**Донъя әҙәбиәте ( 5сәғәт)**

Әкиәттәрҙең төп нигеҙен тоғролоҡ, гүзәллек мотивтары, ҡыйын хәлдә ҡалған кешеләргә ярҙам итергә ынтылыш, кешеләргә һәм уларҙың хеҙмәтенә хөрмәт менән ҡарау идеяһы тәшкил итә. Әкиәттәрҙе уҡығанда аңлатмалы уҡыу талап ителә.Әкиәт жанрын өйрәнеүҙе уны уҡыу йәки һөйләтеү менән башлау отошлораҡ. Был жанр балаларҙа тыңлау һәләтлеген һәм телмәрен үҫтереүҙә ҙур роль уйнай.

**Кластан тыш уқыу ( 8сәғәт)**

Башланғыс мәктәп алдында кластан тыш уҡыу буйынса түбәндәге маҡсаттар тора:

- уҡыу дәрестәрендә алынған белемдәрҙе киңәйтергә һәм тәрәнәйтергә;
- китапты китапханан,кәрәкле материалды китаптан таба белергә;
- уҡыуға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләргә;
- Китап менән үҙ аллы эшләү күнекмәләрен үҫтерергә.

4-се класс программаһында күләмлерәк әҫәрҙәр уҡыу ҡаралған һәм башланғыс мәктәпте тамамлауға оптималь уҡыуға ирешеү, үҙ фекеренде логик яҡтан эҙмә-эҙлекле, асыҡ,дөрөҫ итеп һөйләй һәм яҙа белеү күнекмәләре булдырыу күҙ уңында тотола. Программаға балалар өсөн яҙған күренекле өлкән әҙиптәрҙең (М.Кәрим, З.Биишева, Я.Хамматов, Д.Бүләков, А.Игебаев, Н.мусин, Ф.Иҫәнғолов, К.Кинйәбулатова, С.Әлибаев һ.б.), билдәле йәш яҙыусыларҙың әҫәрҙәре һәм донъя әҙәбиәтенән тиҫтәнән ашыу әҫәр индерелгән. Тирә-яҡ мөхитте танып белеүгә, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе өйрәнеүгә ҡоролған, күркәм сифаттар тәрбиәләү, намыҫлылыҡ, изгелек, шәфҡәтлелек, ғәҙеллек кеүек әхлаҡи проблемаларҙы сағылдырған, матурлыҡты күрергә һәм тыуҙырырға өйрәткән әҫәрҙәргә ҙур урын бирелә. 4-се класс программаһында ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы рәүештә бала китапты үҙ аллы уҡыуға ылыҡтырылған булырға тейеш. Шуға ла дәреслектә бирелгән ҡайһы бер әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе менән бала өйҙә танышып килә. Уҡыусының әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә, әҫәрҙең геройҙарына ҡарата шәхси уй-фекерҙәре тыуа, ҡарашы барлыҡҡа килә. Былар менән ул уҡытыусы һәм тиҫтерҙәре менән уртаҡлашырға тейеш. Уҡыусыға системалы рәүештә әҫәрҙәрҙе өйҙә уҡып килергә ҡушыу уны китап уҡыуға ылыҡтыра, үҙ аллы уҡыу күнекмәһен формалаштыра.

**Уҡыу техникаһы**

Тексты етеҙ, тасуири аңлап уҡыу. Әҫәр йөкмәткеһенә ярашлы хис-тойғоларҙы, уй-фекерҙе белдереп, тауышты көйләп уҡыу.

Минутына **90-100** һүҙ уҡыу. Эстән уҡығанда минутына **120** һүҙҙән күберәк.

4 - се класта балаға үҙе теләгән кәрәкле китапты үҙ аллы һайлай белеү күнекмәһе биреү - был кластың төп үҙенсәлеген тәшкил итә. Уҡыу йылының тәүге яртыһында аҙна һайын 20-25 бит, икенсе яртыһында 30-35 бит китап уҡыу. Башҡорт һәм башҡа милләт яҙыусыларының балалар өсөн төрлө темаға һәм төрлө жанрҙа яҙылған әҫәрҙәре. "Йәншишмә" гәзите, "Аманат", "Аҡбуҙат" журналдары.

Мостай Кәрим, Мәжит Ғафури, Зәйнәб Биишева, Мәрйәм Бураҡаева, Фәүзиә Рәхимғолова, Кәтибә Кинйәбулатова, Раил Байбулатов һ.б., шулай уҡ рус һәм сит ил классиктарының балалар өсөн яҙған күренекле әҫәрҙәре.

**Ятлау өсөн әҫәрҙәр**

Мостай Кәрим."Төш тә,өн дә" бүлегенең "Был шишмәне ... сәскәләр" өҙөгө.

Зәйнәб Биишева. "Ҡояш нимә тине?" хикәйәһенең "Тыш һалҡынса...башланы" өҙөгө.

Зәйнәб Биишева.Ҡыш баһадир.

Яныбай Хамматов. ("Салауат" романынан өҙөк). "Тыуған аҡлан ...тыуған урмандар".

Кәтибә Кинйәбулатова. "Йәшенле юл" хикәйәһенең "Йәшен күренеше" өҙөгө.

Абдулхаҡ Игебаев."Тыуған ер".

Сафуан Әлибай.Яҙ башы.

Ғариф Ғүмәр.Тамсылар.

Фәрзәнә Аҡбулатова.”Толпар ҡанатлы була”хикәйәһенең “Оҙаҡламай көтөү ҡайтыр... ине ул” өҙөгө.

**Уҡыу йылы аҙағына 4-се класс уҡыусыһының әҙерлек кимәленә талаптар**

Уҡыусы:

- тексты аңлап, тасуири уҡый белергә;
- тексты эстән уҡый белергә,
- уҡыған әҫәрҙең темаһын һәм төп асылын, мәғәнәһен билдәләй белергә;
- әҫәрҙең исемен, авторын атай белергә;
- әҫәрҙең йөкмәткеһенә тап килерлек интонация һайлай белергә; темп һәм тонды дөрөҫ билдәләп, логик баҫым, пауза ҡуйып, тейешле тауыш менән уҡый белергә;
- уҡылған әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан өлөштәргә бүлеп, планын төҙөй белергә;

- әҫәрҙе ентекле итеп, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле һөйләй белергә;
- әҫәрҙе ҡыҫҡаса һөйләй белергә;
- әҫәрҙең йөкмәткеһе, идея-тематикаһы буйынса әңгәмәләшә белергә;
- 8-9 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белергә.

-әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылығын,холҡон,тәртибен,тойғоһон,уй-фекерен аңларға,уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға,үҙ мөнәсәбәтеңде белдерергә.ҡылыҡһырлама төҙөй белергә.

-фольклор әҫәрҙәренә миҫалдар килтерә белергә(әкиәтттәр,йомаҡтар, мәҡәлдәр)

-әҙәби әҫәрҙең.халыҡ ижадының ҡайһы бер жанрҙарының(хикәйә, шиғыр, мәҫәл,мәҡәл, йомаҡ, көләмәс,һынамыш )

**3. Тематик план**

**1 класс.**

| № | Программа бүленеше | Сәғәт |
|---|---|---|
| 1 | Мин укый беләм | 1 |
| 2 | Әкиәт укырға яратам | 5 |
| 3 | Атай-ғаилә башлығы | 4 |
| 4 | Өсәйҙәр һәм бәпәйҙәр | 6 |
| 5 | Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт | 3 |

**2 класс.**

| № | **Программа бүленеше** | **Сәғәт** |
|---|---|---|
| 1 | Уҡы, эшлә, аҡыл йый! | 4 |
| 2 | Халҡым йыйған ынйылар | 6 |
| 3 | Әкиәт укырға яратам | 13 |
| 4 | Шып-шым булдыҡ,тын-ғанбыҙ, беҙ бит шиғыр тыңлайбыҙ | 6 |
| 5 | Тәбиғәт- матурлыҡ,байлыҡ, һаҡлаһын уны бар халыҡ | 8 |
| 6 | Әҙәп төбө - матур ғәҙәт. | 16 |
| 7 | Тыуған йортом,ерем- минең күңел нурым! | 5 |
| 8 | Байлыҡ, муллыҡ- тормош етеш, хеҙмәттән алған емеш | 10 |

**3 класс.**

| № | **Программа бүленеше** | **Сәғәт** |
|---|---|---|
| 1 | Белем байрамы) | 1 |
| 2 | Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар | 6 |
| 3 | Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә | 11 |
| 4 | Әҙәптең төбө-ғәҙәт | 13 |
| 5 | Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа | 7 |
| 6 | Йортом, илем, халҡым, киләсәгем... | 13 |
| 7 | Әкиәт укырға яратам | 10 |
| 8 | Илде иңләп, йәмле яҙ килә | 7 |

.

**4 класс.**

| № | **Программа бүленеше** | **Сәғәт** |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы,мәктәп!(1сәғәт ) | 1 |
| 2 | Мостай Кәрим ( 4 сәғәт ) | 4 |
| 3 | Динис Бүләков ( 5сәғәт) | 5 |
| 4 | Яныбай Хамматов ( 3 сәғәт) | 3 |
| 5 | Абдулхаҡ Игебаев ( 2 сәғәт) | 2 |
| 6 | Noғман Мусин ( 5 сәғәт) | 5 |
| 7 | Фәрит Иҫәнғолов (4 сәғәт) | 4 |
| 8 | Кәтибә Кинйәбулатова ( 3 сәғәт) | 3 |
| 9 | Сафуан Әлибай ( 2 сәғәт) | 2 |
| 10 | Фәүзиә Рәхимғолова ( 4сәғәт) | 4 |
| 11 | Факиһа Туғыҙбаева (1сәғәт) | 1 |
| 12 | Наил Ғәйетбай ( 3сәғәт) | 3 |
| 13 | Гөлфиә Юнысова ( 1сәғәт) | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 14 | Раил Байбулатов ( 4сәғәт) | 4 |
| 15 | Рәис Ғабдрахманов ( 5сәғәт) | 5 |
| 16 | Марс Әхмәтшин ( 3сәғәт) | 3 |
| 17 | Фәрзәнә Аҡбулатова ( 2сәғәт) | 2 |
| 18 | Донъя әҙәбиәте ( 5сәғәт) | 5 |

## Әҙәби уҡыу буйынса календарь – тематик план

**2 класс**

| № | Тема | Сәғ. һаны | Уҡыусының төп эшмәкәрлеге | Үтәү ваҡыты | Фактик үтәү ваҡыты | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | **Уҡы, эшлә, аҡыл йый!** | **4** | | | | |
| 1 | Мин уҡыусы. Ф. Туғыҙбаева | 1 | Көҙгө тәбиғәтте һүрәтләү.Яңы уҡыу йылына теләк, пландар менән уртаҡлашыу. | 04.09 | | |
| 2 | Баҫҡыс. Ф. Иҫәнғолов | 1 | | 05.09 | | |
| 3 | Ҡанатһыҙ турғай. З. Кускилдина | 1 | | 10.10 | | |
| 4 | Кешегә кәрәк белем. Ш.Бикҡолов | 1 | | 15.09 | | |
| | **Халҡым йыйған ынйылар** | **6** | | | | |
| 1 | Бишек йырҙары. | 1 | Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ҡомарҡтылары менән танышыу,улар нигеҙендә етеҙ һәм аңлы уҡыу оҫталығын шымартыу.Бишек йырҙарының,һамаҡ- | 17.09 | | |
| 2 | Әшкәк-бешкәк, йәки беҙҙең уйыныбыҙ. Б. Исҡужин | 1 | | 22.09 | | |
| 3 | Бармаҡтар менән уйындар | 1 | | 24.09 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 | Шаяртыуҙар<br>Кластан тыш укыу | 1 | һанамыштарҙың, мәҡәл әйтемдәрҙең,фәстереү,шаярыуҙарҙың ҡасан, ниндәй шарттарҙа ҡулланылыуын аңлау. | 29.09 | | |
| 5 | Таҡмаҡтар | 1 | | 01.10 | | |
| 6 | Йомғаҡлау дәресе.<br>Тикшереү эше | 1 | | 06.10 | | |
| | **Әкиәт укырға яратам** | **13** | | | | |
| 1 | А.Йәғәфәрова Беҙ әкиәт тыңлайбыҙ. | 1 | Әкиәтте укыу,һөйләү,тыңлау ннскәлектәре менән танышыу.Хәл- ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле тасуирлап, йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнеү.Әкиәттән өҙөктәрен ролләп укыу,сәхнәләштереү. Әкиәт геройҙарын ыңғай һәм кире образдарға айырыу. | 08.10 | | |
| 2,3 | Төлкө менән әтәс. | 2 | Әкиәтте укыу,һөйләү,тыңлау ннскәлектәре менән танышыу.Хәл- ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле тасуирлап, йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнеү.Әкиәттән өҙөктәрһе ролләп укыу,сәхнәләштереү. Әкиәт геройҙарын ыңғай һәм кире образдарға айырыу. | 13.10<br>15.10 | | |
| 4,5 | Айыухас менән Айыукәс мәктәптә М.Ғабдрахманов | 2 | | 20.10<br>22.10 | | |
| 6 | Батыр малай (дағстан халыҡ әкиәте) | 1 | | 05.11 | | |
| 7 | Саҡырылмаған ҡунаҡ.<br>З. Кускилдина | 1 | | 10.11 | | |
| 8 | Күгәрсен күҙҙәре<br>Д.Талхина | 1 | | 12.11 | | |
| 9 | Аҡ муйынсаҡ.<br>М. Пришвин<br>Кластан тыш укыу. Г.Х. Андерсен. Борсаҡ өҫтөндәге прицесса | 1 | Әкиәттә изгелекте яуызлыҡтан, хаҡлыҡты ялғандан,ялҡауҙы егәрленән айырырға өйрәнеү. | 17.11 | | |
| 10 | Баҙлауыҡ (япон халыҡ | 1 | | 19.11 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | әкиәте) | | | | | |
| 11 | Ай аҡылға ултыртты. З. Кускилдина | 1 | | 24.11 | | |
| 12 | Төлкө менән кәзә тәкәһе (рус халыҡ әкиәте) | 1 | | 26.11 | | |
| 13 | Йомғаҡлау дәресе. Тикшереү эше. | 1 | | 01.12 | | |
| | **Шып-шым булдыҡ,тын-ғанбыҙ, беҙ бит шиғыр тыңлайбыҙ** | **6** | | | | |
| 1 | Әсәйемдең ҡулы күп. Ф. Туғыҙбаева | 1 | Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнеү,шиғри телмәр үҙенсәлектәре менән танышыу.Ритм,рифма,баҫым күренештәрен күҙәтеү.Бирелгән һүҙҙәргә ҡарата рифмалы һүҙҙәр уйлап табыу,шул һүҙҙәрҙе ҡулланып шиғыр ижад итеп ҡарау. Күренекле балалар яҙыусыларының исем-шәрифтәрен белеү. | 03.12 | | |
| 2 | Көсөк. А.Докучаева | 1 | | 08.12 | | |
| 3 | Ҡорот. С. Ғәләүетдинов | 1 | | 10.12 | | |
| 4 | “Балыҡсы” Айтуған бабай. Ф. Туғыҙбаева | 1 | | 15.12 | | |
| 5 | Бесәйҙең өйө яна (рус халыҡ әкиәте) | 1 | | 17.12 | | |
| 6 | Йомғаҡлау дәресе. Тикшереү эше | 1 | | 22.12 | | |
| | **Тәбиғәт-матурлыҡ,байлыҡ, һаҡлаһын уны бар халыҡ** | **8** | | | | |
| 1 | Б.Ноғоманов.Урман китабы. | 1 | Тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәрҙе тәьҫирләнеп уҡыу. | 24.12 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | Уҡыған буйынса фекер алышыу,тасуирлап һөйләү.<br>Тәбиғәт күренештәренең нескәлектәренә иғтибар итеү,<br>матурлығын тоя белеү,һоҡла-<br>ныу,хис-<br>тойғоларҙытасуирлап һөйләргә өйрәнеү.<br>Тәбиғәтте һаҡларға өйрәтеү. | | | |
| 2 | Урмансы малай. А.Игебаев | 1 | | 26.12 | | |
| 3 | Шыҡыйыусы, шәп йүгереүсе ҡоштар. Ғ.Ишбулатов | 1 | Тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәрҙе тәьҫирләнеп уҡыу.<br>Уҡыған буйынса фекер алышыу,тасуирлап һөйләү.<br>Тәбиғәт күренештәренең нескәлектәренә иғтибар итеү,<br>матурлығын тоя белеү,һоҡла-<br>ныу,хис-<br>тойғоларҙытасуирлап һөйләргә өйрәнеү.<br>Тәбиғәтте һаҡларға өйрәтеү. | 28.12 | | |
| 4 | Тыңлауһыҙ сана менән саңғы . Ф.Иҫәнғолов | 1 | | 14.01 | | |
| 5 | Сәнскеле күлдәк.<br>А. Йәғәфәрова<br>Кластан тыш уҡыу | 1 | | 19.01 | | |
| 6 | Ҡарҙағы яҙыуҙар.<br>Ф. Фәтҡуллина | 1 | | 21.01 | | |
| 7 | Тирәк. Н.Игеҙйәнова | 1 | | 26.01 | | |
| 8 | Йомғаҡлау дәресе.<br>Тикшереү эше | 1 | | 28.01 | | |
| | **Әҙәп төбө - матур ғәҙәт.** | **16** | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Ф.Иҫәнғолов. Флүрәнең ғәйебе нимәлә? Зоосиныф | 1 | Шиғыр,хикәйә,экиәткә ҡарата бирелгән баш исемдәр ярҙамында уҡыласаҡ әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу,унда һүҙ нимә тураһында барасағын күҙаллау. Әҫәрҙең сюжетына иғтибар итеү,геройҙарҙың матур, килешле яҡтарын асыу, уның кешелекле, ғәҙел, хаҡ эштәренә баһа биреү; | 02.02 | | |
| 2 | Ф.Фәтҡуллина.Ҡунаҡ табыны. | 1 | Шиғыр,хикәйә,экиәткә ҡарата бирелгән баш исемдәр ярҙамында уҡыласаҡ әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу,унда һүҙ нимә тураһында барасағын күҙаллау. Әҫәрҙең сюжетына иғтибар итеү,геройҙарҙың матур, килешле яҡтарын асыу, уның кешелекле, ғәҙел, хаҡ эштәренә баһа биреү; | 04.02 | | |
| | | | | | | |
| 3 | С.Яҡупов.Кем маҡтансыҡ | 1 | Шиғыр,хикәйә,экиәткә ҡарата бирелгән баш исемдәр ярҙамында уҡыласаҡ әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу,унда | 09.02 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | hүҙ нимә тураһында барасағын күҙаллау. Әҫәрҙең сюжетына иғтибар итеү,геройҙарҙың матур, килешле яҡтарын асыу, уның кешелекле, ғәҙел, хаҡ эштәренә баһа биреү; | | | |
| 4<br>5 | А.Йәғәфәрова.Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар. | 2 | Шиғыр,хикәйә,әкиәткә ҡарата бирелгән баш исемдәр ярҙамында уҡыласаҡ әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу,унда hүҙ нимә тураһында барасағын күҙаллау. Әҫәрҙең сюжетына иғтибар итеү,геройҙарҙың матур, килешле яҡтарын асыу, уның кешелекле, ғәҙел, хаҡ эштәренә баһа биреү; | 11.02<br>16.02 | | |
| 6 | Г. Яҡупова. Рәхмәт яуғанда | 1 | Шиғыр,хикәйә,әкиәткә ҡарата бирелгән баш исемдәр ярҙамында уҡыласаҡ әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу,унда hүҙ нимә тураһында барасағын күҙаллау. Әҫәрҙең сюжетына иғтибар итеү,геройҙарҙың матур, килешле яҡтарын асыу, уның кешелекле, ғәҙел, хаҡ эштәренә баһа биреү; | 18.02 | | |
| 7 | Ф.Иҫәнғолов. Батырҙар Кластан тыш уҡыу | 1 | | 25.02 | | |
| 8 | Ф. Иҫәнғолов. Ҡыҙҙар менән уйнарға яраймы? | 1 | | 02.03 | | |
| 9 | А.Толстой. Ҡандала | 1 | | 04.03 | | |
| 10 | З. Кускилдина. Ҡасҡан әйберҙәр | 1 | | 09.03 | | |
| 11 | Ф.Иҫәнғолов. Ғәбиттең сере нимәлә? | 1 | | 11.03 | | |
| 12 | Ф.Иҫәнғолов. Һин ни эшләр инең? | 1 | | 16.03 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | |
| 13 | Ф. Туғыҙбаева. Үсегеүсән бер малай. | 1 | | 18.03 | | |
| 14 | Ф.Иҫәнғолов. Нимә тип яуап бирер инең? | 1 | | 23.03 | | |
| 15 | Ж.Кейекбаев. Оморҙаҡ бабай. | 1 | | 25.03 | | |
| 16 | Йомғаҡлау дәресе | 1 | | 25.03 | | |
| | **Тыуған йортом,ерем-минең күңел нурым!** | **5** | | | | |
| 1 | Г. Ғәлиева. Мин йәшәйем Уралда | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы укыу,на-сар күренештәргә ҡарата ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | 06.04 | | |
| 2 | Ф. Туғыҙбаева. Баш ҡала шундай матур | 1 | | 08.04 | | |
| 3 | М.Садиҡова.Тыуған яҡтарым һәйбәт! | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы укыу,на-сар күренештәргә ҡарата ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | 13.04 | | |
| 4 | З. Кускилдина. Өй туйы Кластан тыш укыу | 1 | | 15.04 | | |
| 5 | Ерҙе ҡаплап, сәскә, үлән үҫкән, Тәбиғәттең нуры миңә күскән | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы укыу,на-сар күренештәргә ҡарата | 20.04 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | | | |
| | **Байлыҡ, муллыҡ-тормош етеш, хеҙмәттән алған емеш** | **10** | | | | |
| 1 | Ф. Иҫәнғолов. Өлгөргәнлек һынауы | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы уҡыу,насар күренештәргә ҡарата ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | 22.04 | | |
| 2 | Р. Әбүталипова. Уңған уң ҡул | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы уҡыу,насар күренештәргә ҡарата ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | 27.04 | | |
| 3 | А. Ғәрифуллина. Көтөлмәгән осрашыу | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы уҡыу,насар күренештәргә ҡарата ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | 29.04 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 | Н. Игеҙйәнова. Янғын | 1 | Хикәйәләрҙе аңлы уҡыу,насар күренештәргә ҡарата ҡарашыңды белдереү, баһа биреү,уларҙы бөтөрөү тураһында уйланыу. Уҡығандың йөкмәткеһен һөйләп биреү. | 04.05 | | |
| 5 | Ә. Ихсан. Әсә рәхмәте | 1 | | 06.05 | | |
| 6 | Г. Яҡупова. Ярғанат | 1 | | 11.05 | | |
| 7 | Г. Ситдиҡова. Сер. | 1 | | 18.05 | | |
| 8 | Кластан тыш уҡыу | 1 | | 20.05 | | |
| 9 | Ф. Зыятдинова. Бик ярата мине эш | 1 | | 25.05 | | |
| 10 | Йомғаҡлау дәресе | 1 | | 27.05 | | |

**Әҙәби уҡыуҙан календарь – тематик план**

**4 класс**

| № | Дәрес темаһы | Сәғ. һаны | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлегенең төп төрҙәре | Үтәлеү ваҡыты | Фактик үтәлеү ваҡыты | Иҫкәр-мә |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп<br>Ф.Рәхимғолова.Белем байрамы. | 1 | Мәктәп тарихы, күренекле кешеләр менән танышыу.Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Мәктәпкә , уҡытыусыға ихтирам тәрбиәләү | | | |
| 2 | Мәжит Ғафури.<br>Балалар һәм китап. | 1 | | | | |
| 3 | Мостай Кәрим<br>Беҙҙең өйҙөң йәме.<br>Ҡайт инде,атай, ҡайт! | 1 | Мостай Кәримдең әҫәре аша Бөйөк Ватан һуғышы тураһында белемде киңәйтеү . Һөйләү телмәрен үҫтереү, үҙ аллы эшләү | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 | Мостай Кәрим<br>Беҙҙең өйҙөң йәме.<br>Быны кем икән ул ҡәҙерле ҡунаҡ.. | 1 | күнекмәләрен үҫтереү | | | |
| 5 | Мостай Кәрим.<br>Шулай башлана йәшәү.<br>Йомғаҡлау дәресе. | 1 | Әҫәрҙе аңлап,шыма уҡыу, йәшәү тураһында әңгәмә ҡороу, һөйләү телмәрен үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу. Хеҙмәт тәрбиәһе биреү | | | |
| 6 | Зәйнәб Биишева<br>Ҡояш нимә тине? | 1 | Тәбиғәттең матурлығын күрә белергә өйрәтеү. Эшкә , хеҙмәткә . эшләүсегә һөйөү тәрбиәләү. | | | |
| 7 | Зәйнәб Биишева<br>Йәшел йүгән | 1 | Моделдәр төҙөргә, уларҙы ҡулланып , әҫәрҙе ҡыҫҡартып һөйләргә өйрәнеү. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү | | | |
| 8 | Зәйнәб Биишева<br>Ат менән күгәүен.(Мәҫәл) | 1 | Мәҫәлдең төп фекерен һәм йөкмәткеһен асыҡлау, геройға хас сифаттарҙы барлап, ҡылыҡһырлама төҙөү. | | | |
| 9 | Зәйнәб Биишева.. Ҡыш баһадир. | 1 | Шиғырҙарҙы уҡып, ҡыш билдәләрен асыҡлау һүрәтләү сараларын тәғәйенләү. Уҡыу-эшмәкәрлек теләген уятыу, эмоциональ көйләү, тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Ҡышҡы тәбиғәт менән һоҡланыу, иғтибарлылыҡ сифаттары, туған телебеҙҙең матурлығы менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. | | | |
| 10 | **Тикшереү эше.**<br>**М.Кәрим һәм З.Биишева ижады** | 1 | | | | |
| 11 | Динис Бүләков .<br>Яңы дуҫ. | 1 | Йөкмәкеһен үҙләштереү, шыма уҡыу. Дуҫ –иштәренә ихтирам тойғоһо | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | тәрбиәләү | | | |
| 12 | Динис Бүләков<br><br>Әлфиәнең күҙ йәштәре. | 1 | Һөйләү телмәрен үҫтереү, үҙ аллы эшләү күнекмәләрен үҫтереү. Балаларҙа ыңғай сифаттар тәрбиәләү | | | |
| 13 | Динис Бүләков<br><br>Ҡышҡы сәскәләр | 1 | Әҫәрҙең идея – тематик йөкмәткеһен асыу, һүҙ байлығын арттырыу, сәскәләргә һоҡланыу, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү | | | |
| 14 | Динис Бүләков<br><br>Томбойоҡ сәскәһе. | 1 | | | | |
| 15 | Динис Бүләков<br><br>Йәшел гармун. | 1 | Уҡылған әҫәргә ҡарата үҙ фекерен әйтергә , йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәтеү | | | |
| 16 | Кластан тыш укыу дәресе.<br><br>Минең йәйге мажараларым. | 1 | Ижади һәләттәрен,һөйләү телмәрен үҫтереү, үҙ аллы эшләү күнекмәләрен үҫтереү. Балаларҙа ыңғай сифаттар тәрбиәләү | | | |
| 17 | Яныбай Хамматов | | Салауат тураһындағы | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Салауат.("Салауат" романынан өҙөк.) | 1 | әҫәрҙең йөкмәткеһенән тәрән информация алыу, аңлап уҡыу. Унының тураһында күберәк белеү теләге тыуҙырыу, ҡыҙыҡһыныу. Бөйөк шәхестәребеҙгә ихтирам, улар менән ғорурланыу.Тыуған ереңә һөйөү, тарихҡа, өлкәндәргә ихтирамлы булыу, күңел таҙалығы, яҡшы холоҡ тәрбиәләү | | | |
| 18 | Яныбай Хамматов<br><br>Ҡотҡарыу. | 1 | Әҫәрҙең йөкмәткеһен тулыһынса ҡабул итеү, аңлап уҡыу. Цитаталы план төҙөү, ҡыҫҡартып һөйләү, әңгәмә ҡора белеү һәләтен үҫтереү. | | | |
| 19 | **Тикшереү эше. Д.Бүләков әҫәрҙәре** | 1 | Белемде үҙләштереү кимәлен тикшереү | | | |
| 20 | Абдулхаҡ Игебаев<br><br>Һай, тыуған ер, ғәзиз ер!<br><br>Урал. | 1 | Тыуған ереңә һөйөү, ер-һыу атамаларын хәтергә һеңдереү | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 | Ноғман Мусин<br><br>Етемәк болан балаһы. | 1 | Йөкмәткеһен үҙләштереү, хайуандарҙың ҡышҡы тормошо менән танышыу. Драма әҫәренең үҙенсәлекле эшләнешенә иғтибар итеү, дөрөҫ интонация менән килештереп уҡыу һәм һөйләү.. | | | |
| 22 | Ноғман Мусин<br><br>Ҡарағай башында бер төн. | 1 | Хикәйәнең төп фекерен һәм йөкмәткеһен асыҡлау, геройға хас сифаттарҙы барлап, ҡылыҡһырлама төҙөү. Геройҙарҙың характер һыҙаттарын тасуирлап һөйләү. Көслө, сос, ҡыйыу, отҡор булыуҙың өҫтөнлөгөн күрһәтеү, дуҫтарса мөнәсәбәттә, сәләмәт булырға өндәү. | | | |
| 23 | Ноғман Мусин<br><br>Татлы тамаҡ һуҫар. | 1 | Йәнлектәр тормошонда үҙгәрештәрҙе күҙәтеү, Хайуандарға кеселекле, рәхимле , хәстәрлекле булыу. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 | Ноғман Мусин<br>Ҡоралайҙар. | 1 | Әҫәрҙең төп фекерен асыҡлау, геройҙарҙың эштәренә баһа биреү. Хайуандарға кеселекле, рәхимле , хәстәрлекле булыу. | | | |
| 25 | Кластан тыш уҡыу дәресе<br>Марсель Сәлимов.<br>Дуҫтар | 1 | Текстың идея – тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Төрлө осраҡтарҙы тикшереү һәм үҙ фекереңде әйтә белеү | | | |
| 26 | Фәрит Иҫәнғолов Баҫыу уртаһындағы күл | 1 | Ижади эҙләнеүгә йүнәлеш биреү, һүҙ байлығын арттырып, бәйләнешле телмәр үҫтереү.Яуапһыҙлыҡ, эшкә еңел ҡараштың күңелһеҙ хәлдәргә килтереүен күрһәтеү. | | | |
| 27 | Фәрит Иҫәнғолов<br>Өс малай һәм бер йәйен<br>тураһында хикәйә | 1 | Хикәйәне аңлап уҡыу, йөкмәткеһенә ҡарап, тасуири итеп ролдәргә бүлеп уҡыу. Мәҡәл – әйтемдәр менән һүҙ байлығын арттырыу. Кешенән көлөү, үс алыу, ҡушамат тағыу | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | насар ғәҙәт икәнен төшөндөрөү | | | |
| 28 | Фәрит Иҫәнғолов<br><br>Маҙаһыҙ төн | 1 | Уҡылған әҫәргә ҡарата үҙ фекерен әйтергә , йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәнеү. | | | |
| 29 | Фәрит Иҫәнғолов<br><br>Урман патрулдәре. | <br><br>1 | Эмоциональ ҡабул итеүҙе, ижади күҙаллауҙы үҫтереү,матур һүҙҙәр менән телмәрҙе байытыу.  Тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү. | | | |
| 30 | Кластан тыш уҡыу дәресе<br><br>М.Бураҡаева.<br><br>Тәбиғәттә - гармония | 1 | Тел байлығын арттырыу, Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, һөйөү тәрбиәләү | | | |
| 31 | Кәтибә Кинйәбулатова<br><br>Игенсе | 1 | Уҡылған әҫәргә ҡарата үҙ фекерен әйтергә , йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәтеү.Игенсе һөнәренә хөрмәт тәрбиәләү. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 32 | Кәтибә Кинйәбулатова<br><br>Йәшенле юл. | 1 | Тексҭың идея – тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. | | | |
| 33 | **Йыллыҡ тикшереү эше.**<br><br>. | 1 | Белемде үҙләштереү кимәлен тикшереү. | | | |
| 34 | Сафуан Әлибай<br><br>Һайрашайыҡ, дуҫтар, һабанда. | 1 | Хикәйәнең төп фекерен асыҡлау, актуаллеген билдәләү, план төҙөү. Хеҙмәт һөйөүсәнлек, әҙәплелек, ярҙамға әҙер тороу сифаттарын тәрбиәләү. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | |
| 36 | Фәүзиә Рәхимғолова<br><br>Ҡолонсаҡ. | 1 | Кейек – йәнлектәр тормошонда үҙгәрештәрҙе күҙәтеү, Хайуандарға кеселекле, рәхимле , хәстәрлекле булыу. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | |
| 37 | Фәүзиә Рәхимғолова<br>Шифалы һөт. | 1 | Әҫәрҙе иғтибарлы уҡып ҡымыҙ эшләү серҙәренә төшөнөү. | | | |
| 38 | Фәүзиә Рәхимғолова<br>Салауат күпере | 1 | Әҫәрҙең төп фекерен асыҡлау, образдарға баһа биреү, тел байлығын арттырыу, үҙ хеҙмәтенден кәрәклеген тойоу. | | | |
| 39 | Фәүзиә Рәхимғолова<br>Атай. | 1 | Йөкмәкеһен үҙләштереү, шыма уҡыу. Дуҫ –иштәренә , ғаилә ағзаларына ихтирам тойғоһо тәрбиәләү. | 30.01 | | |
| 40 | Кластан тыш уҡыу дәресе<br>Кирәй Мәргән. Шифалы айран | 1 | Хикәйәнең төп фекерен асыҡлау, ярҙамға әҙер тороу сифаттарын тәрбиәләү. | 4.02 | | |
| 41 | Факиһа Туғыҙбаева | 1 | Уҡылған әҫәргә ҡарата үҙ фекерен әйтергә , | 6.02 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Икмәк. | | йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәтеү.Игенсе һөнәренә хөрмәт тәрбиәләү. | | | |
| 42 | Наил Ғәйетбай<br><br>Аҡбулат батыр. | 1 | Эҙмә – эҙлекле һөйләү күнекмәһен булдырыу. Өүҙемлекте үҫтереү. Балаларҙы ныҡышмалылыҡҡа өйрәтеү | 11.02 | | |
| 43 | Наил Ғәйетбай<br><br>Төнгө осрашыу. | 1 | Тексттың идея – тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Намыҫ . мәрхәмәтлелек төшөнсәләрен аңлатыу, күңелһеҙ хәлдән сығыу юлдарын күрһәреү. | 13.02 | | |
| 44 | Гөлфиә Юнысова .<br><br>Тыуған ерем. | 1 | Эмоциональ ҡабул итеүҙе, ижади күҙаллауҙы үҫтереү,матур һүҙҙәр менән телмәрҙе байытыу. Тыуған Башҡортостан менән һаҡлы рәүештә ғорурланыу, Тәбиғәткә | 18.02 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | һөйөү тәрбиәләү. | | | |
| 45 | Раил Байбулатов<br><br>Күгәсендәр төйәгендә. | 1 | Хикәйәнең төп фекерен һәм йөкмәткеһен асыҡлау, һәр малайға хас сифаттарҙы барлап, ҡылыҡһырлама төҙөү. Йүгерек, һайлап, ролдәргә бүлеп уҡыу, геройҙарҙың характер һыҙаттарын тасуирлап һөйләү | 20.02 | | |
| 46 | Раил Байбулатов<br><br>Батырлыҡ еле. | 1 | Текстың идея – тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙендә саялыҡ, сослоҡ,батырлыҡ сифаттары тәрбиәләү. | 25.02 | | |
| 47 | Раил Байбулатов<br><br>Сәскәләр мажараһы. | 1 | Әҫәрҙең төп фекерен асыҡлау, геройҙарҙың эштәренә баһа биреү. | 27.02 | | |
| 48 | Рәис Ғабдрахманов<br><br>Имән төбөнән сыҡҡан шар. | 1 | Эҙмә – эҙлекле һөйләү күнекмәһен булдырыу. Әүҙемлекте үҫтереү. Балаларҙы ныҡышмалылыҡҡа өйрәтеү. | 4.03 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 49 | Рәис Ғабдрахманов<br>Беҙғолаҡ. | 1 | Кейек – йәнлектәр тормошонда үҙгәрештәрҙе күҙәтеү, Хайуандарға кеселекле, рәхимле , хәстәрлекле булыу. | 6.03 | | |
| 50 | Рәис Ғабдрахманов<br>Ултырма ҡыҙ. | 1 | Әҫәрҙең төп фекерен асыҡлау, образдарға баһа биреү, тел байлығын арттырыу, үҙ хеҙмәтенден кәрәклеген тойоу.Хәтерҙе үҫтереү, уҡыусыларҙа намыҫ, әҙәп , сабырлыҡ кеүек гүзәл сифаттар тәрбиәләү. | 11.03 | | |
| 51 | Рәис Ғабдрахманов<br>Капитан. | 1 | | 13.03 | | |
| 52 | Рәис Ғабдрахманов<br>Ысын дуҫлыҡ.<br>Кластан тыш укыу | 1 | Әҫәрҙең төп фекерен асыҡлау, геройҙарҙың эштәренә баһа биреү. | 18.03 | | |
| 53 | **Тикшереү эше.**<br>**Р. Байбулатов,**<br>**Р. Ғабдрахманов әҫәрҙәре** | 1 | Белемде үҙләштереү кимәлен тикшереү | 20.03 | | |
| 54 | Марс Әхмәтшин<br>Бер урам малайҙары. | 1 | Хикәйәнең төп фекерен һәм йөкмәткеһен асыҡлау, һәр малайға хас сифаттарҙы барлап, | 1.04 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | ҡылыҡһырлама төҙөү. Йүгерек, һайлап, ролдәргә бүлеп уҡыу, геройҙарҙың характер һыҙаттарын тасуирлап һөйләү. Көслө, сос, ҡыйыу, отҡор булыуҙың өҫтөнлөгөн күрһәтеү, дуҫтарса мөнәсәбәттә, сәләмәт булырға өндәү. | | | |
| 55 | Марс Әхмәтшин<br>Кәрәҙле бал. | 1 | Уҡылған әҫәргә ҡарата үҙ фекерен әйтергә , йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәтеү. | 3.04 | | |
| 56 | Марс Әхмәтшин<br>Гөлйемеш.Кластан тыш уҡыу | 1 | Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре менән танышыу, бер үк үҫемлектең төрлө төбәктә төрлөсә атамаһын өйрәнеү. Диалогты тасуири уҡыу, һөйләү телмәрен үҫтереү. Үҫемлектәргә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, | 8.04 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 57 | Фәрзәнә Аҡбулатова<br>Толпар ҡанатлы була. | 1 | Хикәйәнең төп фекерен асыҡлау, актуаллеген билдәләү, план төҙөү. | 10.04 | | |
| 58 | Фәрзәнә Аҡбулатова<br>Атай икмәге. | 1 | Тасуири уҡыу, йөкмәтке буйынса әңгәмәләшеү. | 15.04 | | |
| 59 | **Тикшереү эше**<br>**М.Әхмәтшин һәм Ф.Аҡбулатова әҫәрҙәре** | 1 | Белемде үҙләштереү кимәлен тикшереү | 17.04 | | |
| 60 | Ғабдулла Тукай.<br>Мәҫәл. | 1 | Мәҫәлдең төп фекерен һәм йөкмәткеһен асыҡлау | 22.04 | | |
| 61 | Ғабдулла Тукай<br>Бишек йыры. Шүрәле. | 1 | Яҡшы менән яманды айыра белеү, сослоҡ, тапҡырлыҡ сифаттарын тәрбиәләү. | 24.04 | | |
| 62 | Шарль Перро. Ҡыҙыл Башлыҡ. | 1 | Проектлау технологияһын ҡулланып, әҫәрҙе үҙ аллы сәхнәләштереү, ижади эшләү күнекмәһен камиллаштырыу | 29.04 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 63 | Бер Туған Гриммдар.<br>Бутҡа көршәге.<br>Аҡыллы кәтөүсе. | 1 | Әкиәттең йөкмәткеһен үҙләштереү, уҡыу темпын тиҙләтеү буйынса махсус эш. Моделдәр төҙөү һәм уларҙы ҡулланып, әҫәрҙең йөкмәткеһенә төшөнөү, ентекләп һөйләү. Әкиәт геройҙары образдары аша ыңғай сифаттар тәрбиәләү. | 3.05 | | |
| 64 | Кластан тыш уҡыу.<br>Туғыҙ улан.<br>Алып батыр | 1 | Үҙ аллы уҡып әҫәрҙең йөкмәткеһенә төшөнөү. Тормошто таянып белеү һәләтен үҫтереү. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү. | 6.05 | | |
| 65 | Юлий Ванг. Аҡҡош.<br>Абай Ҡонанбаев. Йәш быуынға. | 1 | Әкиәттең йөкмәткеһен аңлау, ентекләп һөйләү, тормоштоң яҡшы-яман яҡтарын күрә белеү һәләтен үҫтереү. | 8.05 | | |
| 66 | Япон халыҡ әкиәте. Йәшлек шишмәһе.<br>Джанни Родари. Һорауҙар. | 1 | Әкиәттең йөкмәткеһен моделдәр ярҙамында үҙләштереү, ҡыҫҡаса һөйләү.. | 13.05 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 67 | Донъя әҙәбиәте буйынса йомғаҡлау дәресе. | 1 | Өйрәнелгән материалды системаға һалыу. Үҙ аллы, ижади эшләү, үткән дәрестәрҙә үҙләштергән күнекмәләрҙе камиллаштырыу. | 15.05 | | |
| 68 | **Тикшереү эше.Донъя әҙәбиәте .** | 1 | Белемде үҙләштереү кимәлен тикшереү. | 20.05 | | |
| 69 | Донъя әҙәбиәте буйынса әкиәттәр донъяһында | 1 | Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен моделдәр ярҙамында үҙләштереү, ҡыҫҡаса һөйләү | 22.05 | | |
| 70 | Донъя әҙәбиәте буйынса әкиәттәр донъяһында | 1 | Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен моделдәр ярҙамында үҙләштереү, ҡыҫҡаса һөйләү | 24.05 | | |
| | | | | | | |